ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 сентябрь (һарысай) 2022

№37 (1027)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 798 һум 60 тин. Өфө халҡы "Өфөматбуғат" киоскыларында - 600 һумға, коллектив менән редакцияның үҙендә (кәмендә 5 дана) 372-шәр һумға яҙыла ала. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ат итеме, әллә йылҡы итеме?**



3,6

**Фильм төшөрмәһәм...** тормошом төҫһөҙләнә башлай



8-9

**Милли кейемдә булайыҡ!**



11

**Кинйә Арыҫланов,** йәки Батырҙың тыуған ауылына нисә йыл?



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

КӨНАУАЗ

# ТУҒАН ТЕЛЕНӘН...

## мәхрүм булмаһын бала!





*Республика Башлығы Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы исемен алыусы Х. Кинйәбаева менән.*

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала Туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының төбәк-ара форумы уҙғарылды. Унда Башҡортостан, Татарстан, Пермь крайы, Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән 280-дән ашыу мәғариф хеҙмәткәре ҡатнашты. Ике көн дауам иткән сараға йомғаҡтар "Торатау" Конгресс-холында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашлығындағы түңәрәк ҡорҙа яһалды.**

Форумдың тәүге көнөндә башҡорт телен һәм башҡа туған телдәрҙе уҡытыу, был юҫыҡта алдынғы эш тәжрибәләрен өйрәнеү, заман технологияларын ҡулланып эшләү кеүек мөһим йүнәлештәрҙе үҙ эсенә алған мәғариф кластерҙары һәм түңәрәк ҡорҙар ойошторолдо. "Smart мәктәптәр. Полилингваль һәм билингваль белем биреү", "ZA Россию. ZA Башкортостан. ZA родной язык", "Мәғариф флагмандары. Башҡорт теле", "Белем биреү мөхите. Туған телдәр", "Туған телдәр медиакиңлектә. Перезагрузка", "Балалыҡ территорияһы" тигән тематик бүлектәр буйынса һәр кем үҙенә кәрәкле мәғлүмәт, тәжрибә, яңылыҡ ишетте. Ә бына "Мәктәпкәсә белем биреү һәм ғаилә тәрбиәһе", "Инновацион милли һәм полилингваль мәктәптәр", "Дөйөм һәм һөнәри белем биреү системаһында башҡорт теле", "Дөйөм һәм өҫтәмә белем биреү системаһында туған телдәр", "Этномәҙәни һәм патриотик тәрбиә" темаларына арналған фекер алышыу майҙансыҡтарында һәр ҡатнашыусы үҙ ҡарашын белдерә, борсоған һорауҙарҙы уртаға һалып кәңәшләшә, коллегаларының фекерен ишетә һәм уртаҡ тел таба алды. Әйткәндәй, был ҡорҙарҙа яңғыраған иң актуаль һорауҙар һәм ҡарарҙар форумдың икенсе көнөндә республика етәксеһе Радий Хәбиров менән осрашыу ваҡытында тағы бер ҡат күтәрелде һәм, ғәҙәттәгесә, береһе лә яуапһыҙ ҡалманы.

Туған тел уҡытыусылары менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы махсус хәрби операцияла батырлыҡ күрһәтеп, Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған яҡташтарыбыҙ Максим Серафимов, Тамерлан Илһамов, Игорь Насибуллинды телгә алды һәм Ватанын һаҡлар ир-егеттәрҙе тәрбиәләүҙә педагогтарҙың роле баһалап бөткөһөҙ булыуын белдәләп, рәхмәт һүҙҙәрен әйтте. Һәм илһөйәр, телһөйәр, берҙәм быуын тәрбиәләү буйынса эштәрҙе дауам итеү маҡсатында был форум йыл һайын үткәрелергә, Башҡортостан халыҡтарының телдәрен һәм мәҙәниәттәрен һаҡлау буйынса мөһим мәсьәләләрҙе бергә хәл итергә кәрәк, тип билдәләне. Был юлы Радий Хәбиров үҙ сығышында республикала полилингваль белем усаҡтарына айырыуса ҙур иғтибар бүлде. "Уларҙа беҙ телдәрҙе өйрәнеүгә ихтыяжды арттырабыҙ, яңы уҡытыу алымдарын индерәбеҙ. Республикала бындай дүрт гимназия эшләй. Учалыла ошондай бишенсе учреждениеның төҙөлөшөн барып ҡараным. Быйыл беҙ Әбйәлил районында полилингваль гимназия төҙөй башлайбыҙ. Шулай уҡ удмурт полилингваль гимназияһы буйынса проектҡа тотонасаҡбыҙ. Бында мәсьәлә кирбес стеналар төҙөп ултыртыуҙа түгел, ә шунда уҡырға теләүсе балалар һәм белем бирергә әҙер уҡытыусылар булыуҙа", - тине Радий Фәрит улы. Шулай уҡ республика Хөкүмәтенең бындай алдынғы белем усаҡтарында заманса уҡыта алырҙай кадрҙар менән тәьмин итеүгә лә етди ҡарашы сағылды был сығышта: полилингваль гимназия педагогтарының квалификацияһын арттырыу маҡсатында стажировкалар үтеүенә аҡсалата ярҙам буласаҡ. Бынан тыш, яҡын-тирәләге сит илдәрҙең ошондай уҡ учреждениелары менән даими тәжрибә уртаҡлашып тороу өсөн киләһе йылда халыҡ-ара кимәлдәге сара уҙғарырға тәҡдим итте республика етәксеһе.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# КҮҢЕЛДӘРГӘ БЕР ҠЫЛ ТАРТЫЛҺЫН,

## илем, халҡым тигән изге ҡыл

**Күңелемде бушлыҡ биләп алмаһын, тип, саҡ ҡына ваҡыт тапһам, шиғырҙар уҡырға яратам мин. Улар йәнде дауалай, көс-ғәйрәт өҫтәй. Бына бөгөн ҡулыма Рәми Ғариповтың шиғри йыйынтығын алдым. "Бер ҡыл" шиғырынан өҙөктө күсереп яҙам:**

*"Бер көн килеп боронғо бер дуҫым*
*Бөрөп алды шулай алҡымдан:*
*- Паганини ҙә бит түгелһең, - ти, -*
*Уйнайһың, - ти, - әммә бер ҡылда.*
*Ил дә тел тип ҡаңғырғансы,*
*Ҡалдырсы шул иҫке бер ҡылды!" -*
*Тигәс дуҫым, бер дошманым артты,*
*Ә күңелдә бер ҡыл тартылды!*
*Иҫке бер ҡыл! Изге бер ҡыл йәнгә!*
*Ул тартылған сәсән халҡымдан..."*

Аҙағынаса уҡып сыҡтым да был шиғырҙы, китабымды ябып, бүтән эштәремде ҡулыма алдым. Үҙ тормошомдағы ваҡиғалар бер-бер артлы хәтерҙә ҡалҡып сыҡты.

Шулай, икенсе синыфты тамамлаған көндө бер дуҫым яныма килеп, күҙҙәремә ҡарап:

- Бер кешене һәр саҡ яҡлайҙар... - тине лә, боролоп китеп барҙы.

**(Дауамы 2-се биттә).**

✓ **Динә яҡлау өмөт итеп участка полицияһына 13 (!) тапҡыр ғариза яҙып ҡарай, ләкин быны ң файҙаһынан зыяны күберәк булып сыға: асыуынан, көнләшеүҙән аҡылын юйған ир Динәне 14 тапҡыр бысаҡ менән сәнскеләй.**



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# КҮҢЕЛДӘРГӘ БЕР ҠЫЛ ТАРТЫЛҺЫН,

## илем, халҡым тигән изге ҡыл

(Башы 1-се биттә).

Нинә был һүҙҙәрҙе әйтте икән дуҫым? "Бер кеше" ул кем икән, тип, коридорға сыҡһам, унда беҙҙең синыф ҡыҙҙары мәж килә, табелдән үҙҙәренең фамилияларын табып, билдәләрен ҡарайҙар. Уларға ҡушылып, мин дә үҙ фамилиямды тәңгәленән билдәләремде эҙләйем: уҡыуҙы "дүрт" тә "биш" билдәләренә генә тамамлағанмын икән. "Дүрт"тәрем дә өҙ. Баяғы дуҫҡайымдың билдәләрен ҡараһам, уның "өс"тәре лә байтаҡ икән. Шунда, уҡытыусы нинә мине яҡлай икән, тигән уй үтте башымдан. Беҙҙең бит беребеҙҙең дә ата-әсәһе юҡ, бөтәбеҙ ҙә бер төрлө, хатта кейемдәребеҙ ҙә бер иш, тип уйландым, тик уйҙарымдың осона сыға алманым. Бик күп йылдар үтһә лә, күҙҙәремә ҡарап, бәреп әйтелгән һүҙҙәр онотолмай. Нисектер, еңел уҡыным мин мәктәп йылдарында. Әллә дәрестәрҙә уҡытыусыларҙы ихлас, иғтибар менән тыңларға яратыуым, әллә хәтерем һәйбәт булыуы быға сәбәп булғандыр, тип уйлайым.

Йылдар үтте. Уҡыным, эшләнем. Әле бик күп йылдар пенсияламын. Бер көн әхирәтем Фаягөл ҡунаҡҡа килде. Сәйҙәр эсеп, хәтирәләр сисеп ултырабыҙ.

- Фаягөл, мин был һорауымды бер кемгә лә биргәнем юҡ ине, һинән һорайым әле. Училищела уҡығанда ҡыҙыҡ ҡына хәл булды: бер уҡытыусыбыҙ мине ситкәрәк саҡырып алды ла: "Һинең талантың юҡ, һине Филипп Дмитриевич ярата, шуға һинә "5" ҡуя. Ысын отличник түгелһең һин", - тип әйтеп, ары китеп барҙы. "Һинең талантың юҡ, белем байлығына таянып ҡына һәйбәт проекттар яһайһың",- тип, бөтә курсташтарым алдында икенсе юлы тағы сәпәп әйтте. "Нинә ул минә ул һүҙҙәрҙе әйтте икән?" тип әле булһа уйланам", - тип, үҙемде күптән борсоған уйҙарым менән уртаҡлаштым.

Фаягөл рәхәтләнеп көлдө лә:

- Ә минең талантым булмағас, ул һүҙҙәрҙе миңә әйтеүсе булманы. Юҡты юҡ тип әйтеүҙән ни файҙа, ә бына барҙы юҡ тип әйтеп, сағып алһаң, көнсөлдөң күңеле була, - тине.

Мин дә йылмайҙым. Күңелемдәге ауыр таш иреп юҡҡа сыҡты. Рәхмәт әхирәтемә. Ә мин ғүмерем буйы шул ябай һорауға ла яуап таба алмағанмын. Тик ауыр һүҙҙәр ишеткән һайын, мин тағы ла ныҡыраҡ тырышып уҡыным, эшләнем. Һуңлап булһа ла "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы" тигән исемгә лә лайыҡ булдым. Кешеләр бер-береһенә ауыр һүҙҙәрҙе сәмгә тейер өсөн әйтәләрме, әллә бөтөрөп ташлау өсөнмө икән? Ә мин ауыр һүҙ әйтеүселәрҙе тәрбиәһеҙ кешеләр тип ҡабул иттем. Тәрбиә етерлек кимәлдә бирелмәгән уларға. Мин үҙем уларҙы йәлләйем...

...Ә Рәми Ғариповтың баяғы шиғырына килгәндә, милләттәштәремдән күбеһе "илем", "телем", тип йөшәй, Рәми әйткәнсә, бер ҡылды тарта, көйләй. Беҙҙән һуң килгән йәштәр ҙә дауам итер уны, иншалла. Шағир әйткәнсә, "Уяҙар, мең ғазаптар аръҡылы ул ҡыл үтеп инһән йөрәгебеҙгә". Шуға ла, бер ҡыл тартып, бер маҡсат менән йәшәгән туғандарҙың, милләттәштәрҙең бер-береһенең битен тырнамай ғына көн итеүҙәрен күрге килә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ТУҠМАЙ ИКӘН... ЯРАТМАЙ!

**Урыҫ телмәр әйләнешендә йөрөп ятҡан "Туҡмай икән, тимәк, ярата" тигән бер әйтем, ғәҙәттә, иренән йәберләнеп йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙы йыуатыу өсөн, ә дөрөҫөрәге, ҡатынын туҡмауысы ир ҡылығын аҡлау рәүешендәрәк ҡулланылыуын беләбеҙ. Асылда иһә, быны ң һис кенә лә дөрөҫлөккә тап килмәгәнен дә яҡшы аңлайбыҙ.**



Ә ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң был тупыҙ әйтем? "Бьет, значит любит" тигән мәҡәлдең килеп сығышын Тәүратта әйтелгән: "Господь, кого любит, того наказывает (наказывает - "нәсихәт, өгөт" мәғәнәһендә - **авт.**); бьет же всякого сына, которого принимает" тигән нәсихәттең әҙәм балаһы тарафынан үҙенә "унайлаштырып, яйлаштырып" алынған варианты тип аңлата тел белгестәре. Борон был нәсихәтте ҡайғы-хәсрәткә дусар ителгән кешене йыуатыу өсөн, уның Аллаһ тарафынан ситнәтелеүен түгел, киреһенсә, һынауҙар аша яҡын күрелеүен, яратылыуын белдерер өсөн әйткәндәр. Иллә мәгәр был нәсихәттең иренән ҡыйырһытылыусы ҡатынды йыуатыусы "Туҡмай икән, тимәк, ярата" тигән әйтем менән бер ниндәй мәғәнә уртаҡлығы ла юҡ, был бары тик изге Китаптан "йолҡоп" алынып, ғаиләлә көс ҡулланыу фактын аҡлаусы, "йомшартыусы" һәм адресаты үҙгәртелеп әйтелеүсе һүҙҙәр генә. Һәм, бәлки, улай ғына ла түгелдер, уйлап ҡарағанда, сөнки ҡатынын йәберләүсе ирҙе һәм, ғөмүмән, ирҙәрҙе аллалаштырыуға ишара ла һиҙелгәндәй түгелме? Ә бит үҙенде Аллаһ менән сағыштырып, башҡа кеше ихтыярынан өҫтөнлөк ҡылып, уны иреҡһеҙлап, буйһондороп, яза биреп йәшәү - ҙур гонаһ! Ислам динендә лә ҡатын-ҡыҙға изгелекле, гүзәл мөнәсәбәт маҡтала, уны үҙенә кәрәккәнсә "турайтырға" ("кабырға" тип ҡаралғанлыҡтан) маташып, һындырып ҡуйыуҙан һаҡ булырға, һуҡмаҫҡа, ауыр, эшәке һүҙҙәр әйтмәҫкә һәм ҡатын-ҡыҙға мөғәмәләлә Аллаһтан ҡурҡыу фарызлығы ҡат-ҡат иҫкәртелә.

Үкенескә, тормошобоҙҙоң алтын нигеҙен тәшкил итер дин тәғлимәттәренән алыҫлашыу, наҙанлыҡ, тәрбиәһеҙлек бөгөнгө заманда әлеге шул ҡатын-ҡыҙға булған мөнәсәбәттәрҙә лә асыҡ күренә. Айырыуса һуңғы ваҡыт ғаиләлә көс ҡулланыу, ҡатын-ҡыҙға ҡарата агрессия көсәйеүе кешелектең рухи бөлгөнлөк алдында тороуына дәлил түгелме? Шуныһына һуш китерлек: ошо көндәрҙә генә Көс ҡулланыуҙан йәберләнеүселәрҙе яҡлау үҙәге "Яҡтылыҡ алгоритмы" махсус тикшеренеүҙәр программаһы һығымталарын баҫып сығарҙы һәм Башҡортостан көс ҡулланыуҙан һәләк булған ҡатын-ҡыҙҙар һаны буйынса Рәсәйҙә икенсе урында тип иғлан ителде.

**Был тикшеренеүҙәр кеше үлтергән өсөн хөкөм ителгән суд ҡарарҙары араһынан ил буйынса көс ҡулланыу ҡорбандарын иҫәпләп сығарыу юлы менән 2020 һәм 2021 йылдарҙа ғына ла ирҙәре йәки туғандары тарафынан үлтерелгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың 70 процент (йәгни төрлө сәбәптән һәләк булған 18 547 ҡатын-ҡыҙҙан - 12 209 кеше) тәшкил итеүе хаҡында хәбәр итте.**

Әлеге тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, һуңғы 9 йыл эсендә генә лә Башҡортостанда 555 ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә көс ҡулланыуҙан һәләк булған, ә беренсе урында торған Мәскәүҙә - 574 үлем осрағы. Бындай һандарҙан сәстәр үрә торорлоҡ. Һуңғы осор социолог һәм психологтар "Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн иң хәүефле урын - уның йәшәгән йорто" тип сан ҡағырға мәжбүр булдылар хатта.

Миҫалдар артынан алыҫ йөрөү ҙә кәрәкмәй. Яңыраҡ ҡына республиканы ғына түгел, бөтөн ил шаңҡытҡан Белорет фажиғәһен генә алайыҡ. Яратышып өйләнешкән йәштәрҙең тормошо тотанаҡһыҙ һәм көнсөл ир арҡаһында түҙеп торғоһоҙ язаға әүерелә бара. Туҡмалыуҙар һәм кәмһетелеүҙәргә түҙмәгән Динә айырылырға мәжбүр була, бөтөн күңеле, дәрте менән эшкә бирелә. Эшендә лә өмөтлө белгескә яуаплы бүлек менән етәкселек итеүҙе ышанып тапшыралар. Бөтәһе лә яҡшы булыр ине, тик айырылышҡан булыуҙарына ҡарамай, элекке ир ҡатынға тыныслыҡ бирмәй. Туктауһыҙ йәберләүҙәргә, хәүефле янауҙарға дусар ителгән Динә яҡлау өмөт итеп участка полицияһына 13 (!) тапҡыр ғариза яҙып ҡарай, ләкин быны ң файҙаһынан зыяны күберәк булып сыға: асыуынан, көнләшеүҙән аҡылын юйған ир ҡатындың шәхси билдәмәһенә баҫып инеп, Динәне 14 тапҡыр бысаҡ менән сәнскеләй. Ҡатындың 13 һәм 6 йәшлек ике улы етем ҡала. Ә ир иһә полицияға барып енәйәте тураһында хәбәр итһә лә, Динәнең яҡындары, шулай уҡ йәмәғәтселек вәкилдәре ҡурҡыныс енәйәтсенең ғәҙел яза алырына шик белдерә, сөнки был инан ике йыл элек Саткыла бәләкәй ҡыҙ балалары алдында ҡатынын сәнсеп үлтергән шундай уҡ көнсөл һәм дыуамал ирҙең "психик ауырыу" ҡарары менән язанан ҡотолоп ҡалыуын онотмағандар әле.

"Комсомольская правда"-Өфө" сайты ошо юҫыҡта республикала билдәле блогер һәм йәмәғәтсе Азамат Ғәлиндың ғаиләлә көс ҡулланыу тураһында закон ҡабул итеүҙе һәм был законға Динә Махийәнова исемен биреүҙе тиҙләтергә тигән тәкдимен депутаттар иғтибарына йүнәлтә. Ошо юҫыҡта тиран ир йә элекке йәре әҙәрлеклеүҙәренән, янауҙарҙан йәберләнеп йәшәүсе

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда 638 кеше коронавирус йоҡторған, өсәү үлгән. Пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 306,7 меңдән ашыу COVID-19 осрағы теркәлгән. Ошо ваҡыт эсендә 5804 кеше яңы коронавирус инфекцияһы ҡорбаны булған, уларҙың күбеһе - 60 йәштән өлкәндәр. Бөгөнгә республикала 257 кеше коронавирус инфекцияһы диагнозы менән дауаханаға һалынған, уларҙың туғыҙы - ауыр хәлдә, берәүһе үпкәне яһалма еләтеү аппаратында. Ә 3599 сирле өйҙә дауалана. 3,022 миллион кеше өсөн вакцинация тулыһынса тамамланған.

✓Башҡортостанда COVID-19 буйынса эпидемиологик хәл сағыштырмаса тотороҡло. Әлегә ковидҡа ҡаршы саралары көсәйтеү талап ителмәй, тип белдерҙе Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығы вәкиле. Ләкин ведомствола йәш сабыйҙар һәм оло йәштәгеләр араһында сирлеләрҙең артыуын билдәләйҙәр. "Беҙҙә бер йәшкәсә балалар араһында ауырыуҙар арта, 198 күрһәткес. 65 йәштән өлкәндәр - 122, 50-64 йәштәгеләр - 99 сирле", - тип билдәләне белгес.

✓"Бөгөн беҙ бөйөк скульпторыбыҙ Салауат Щербаков менән һул барельефтың әҙерлеген ҡараныҡ, - тип яҙҙы республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. - Салауат Александрович әйткәнсә, бында башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге тарихынан сюжеттар һүрәтләнгән. "Урал батыр" эпосы, Салауат Юлаев, башҡорт атлылары... Эштәр графикка ярашлы бара, тиҙҙән баш ҡалабыҙҙы генерал Шайморатовтың скульптураһы биҙәр. 11 октябрҙә, Республика көнөндә, һәммәгеҙҙе лә һәйкәл асыу тантанаһына саҡырам".

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә Учалыла төҙөлгән 1225 урынлыҡ яңы мәктәпте ҡорамалдар менән йыһазландырыу темптарын арттырырға ҡуша. Ул йома көндө эш сәфәре барышында ошо белем усағында булыуын, мәктәп балаларҙы ҡабул итергә әҙер икәнен дә әйтте. 18,3 мең квадрат метр майҙанлы дүрт ҡатлы мәктәптә тамашалар залы, ашхана, ике спорт залы, табип бүлмәһе, процедуралар, прививка яһау һәм стоматология кабинеттары, мөмкинлектәре сикле уҡыусылар өсөн пандустар, лифт бар. Ул Башҡортостанда иң ҙур белем усаҡтарының береһе булыр тип көтөлә.

✓ *Шуға ла егеттәр менән танышып, дуҫлашып йөрөүсе ҡыҙҙарға хис-тойғо буранына ҡарамайынса, буласаҡ тормош юлдашын һынабыраҡ һайлап, иғтибарлыраҡ тикшереп сығыу кәрәк, ти психологтар.*



ҡатын-ҡыҙға үҙҙәрен нисек тотоу кәрәклеге тураһында психолог кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу урынлы булыр ине, тик шунан алда психологтарҙың даими рәүештә ҡыйырһытылып, гел тукмалыусы ҡатындарҙың, ғәҙәттә, үҙ-үҙҙәрен баһалап еткермәүсе, тауыш сығыу сәбәптәрен үҙҙәренән күреп, үҙҙәрен ғәйепләп йәшәүсе кешеләр булараҡ баһалауын хәтерҙә тотоу һәм бындай сифаттарҙан мөмкин тиклем иртәрәк арыныу кәрәк. Ә бит тап бына ошоно Динә Махийәноваға ҡарата әйтеп булмаҫ ине, сөнки ул үҙ мөмкинлектәрен һәм баһаһын яҡшы аңлаған, ике юғары белемле, аҡыллы ҡатын була һәм артабан баҫылып йәшәргә теләмәй, тик шулай ҙа ирен, балаларын йәлләп, ҡыйырһытылып йәшәүен дауам итә, айырылыу ваҡытын һуҙа, икеләнә, ҡурҡа. Әлбиттә, иренең дыуамал, үҙ-үҙенә контролде юғалта торған ҡанһыҙ кеше икәнен яҡшы белгәнлектән, Динәгә ҡырҡа ғына ҡарар ҡабул итеүе ауыр һәм хәүефле аҙым була. Шуға күрә лә айырылып, башҡа тора башлағас та ҡатын даими янауҙар аҫтында йәшәй һәм ысынлап та ғүмеренең ҡыл өҫтөндә торғанын яҡшы күҙаллай.

Шул ваҡыт уға, бәлки, балаларын алып, ҡайҙалыр ситкә сығып китеү кәрәк булғандыр? Психологтар, ғәҙәттә, бындай осраҡтарҙа асыулы ир күҙенә салынып йөрөүҙән киҫәтә һәм хәүеф сығанағынан мөмкин тиклем алыҫҡараҡ китеп, юғалып торорға ла кәңәш бирә. Ә Динәнең бындай мөмкинлеге була, ул Өфөнән ипотекаға фатир ҙа алған булған, ти әхирәттәре. Һәр хәлдә, белемле йәш белгес ҡайҙа ла юғалып ҡалмаҫ ине, тик барыбер психикаһы тотороҡһоҙ, үс көсәүсе бындай ирҙән алыҫ ҡасып ҡотола алыр инеме икән Динә? Шуға ла егеттәр менән танышып, дуҫлашып йөрөүсе ҡыҙҙарға хис-тойғо буранына ҡарамайынса, буласаҡ тормош юлдашын һынабыраҡ һайлап, иғтибарлыраҡ тикшереп сығыу кәрәк, ти психологтар. Ысынлап та, күнелдә һағайыу тыуҙырған бәләкәй генә шик-шөбһәне лә иғтибарға алыу ҡамасауламаҫ ине. Ә бит күңеле әллә ни таҙанан булмаған әҙәмдәрҙең тиҫкәре сифаттары өйләнешеррҙән алдараҡ та хатта бер булмаһа, бер ҡалҡып сығасаҡ бит барыбер, тик бына шуны алданыраҡ, иртәрәк күрә белергә кәрәк ҡыҙҙарға.

...Донъя күләмендә көн һайын ире йә туғандары тарафынан 137 ҡатын үлтерелә, тип белдерә БМО-ның наркотиктар һәм енәйәтселек буйынса идаралығы. Рәсми статистика буйынса ғаиләлә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә ғүмерҙәре ҡыйылған ҡатындар һаны буйынса Рәсәй донъяла беренсе урында. Ғәжәп, ләкин факт: беҙҙең илдә хәҙер депутаттар нисә йылдар инде ултырыштар үткәрә, туктауһыҙ бәхәс ҡора, ә шашыныуҙың сиген ашатлаған ҡанһыҙ ирҙәренең тос йоҙроҡло "енел" ҡулынан ҡатындары яҡты донъяны, ғәзиз балаларын, туғандарын ташлап, теге донъяға китә тора... Ә 2019 йылдың ноябрендә үк Рәсәйҙә ғаилә һәм көнкүрештә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү тураһында Федерация Советы сайтында донъя күргән закон проекты әле булһа төрлө сәбәптәр арҡаһында ҡабул ителмәй ҡала килә. Ҡайһы бер депутаттар фекеренсә, бындай закон, йәнәһе лә, ғаилә институтын емерәсәк икән дә! Ә бындай "институт"-тарҙың байтағында иреш-талаш, һуғыш, үлтереш тынмай һәм шунлыҡтан меҫкен балалар психик йәһәттән сәләмәт булып үҫә алмай икән, был ысынлап та ғаиләме ул һәм ундай ғибрәт "ғаилә институты" кәрәкме беҙгә?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

АТАЙҘАР БЕЛЕМЕ

# АТ ИТЕМЕ, ӘЛЛӘ ЙЫЛҠЫ ИТЕМЕ?



**Автомобиль тотҡан һәр кеше теге йәки был проблемаһы менән автосервисҡа йә, һис юғында, берәй белемле таныш автоһөйөүсегә мөрәжәғәт иткәне барҙыр. Шул өлкәлә бәгзе берәүҙең ғәйәт күп белеүенә ғәжәпләнәһең. Һәр төрлө автомобиль төрҙәрен, уларҙың двигателдәре һәм башҡа частары буйынса айырмалыҡтарын биш бармағы һымаҡ белгән кешеләрҙе күргәнем бар. Илдә булған барлыҡ тиерлек машина маркаларын белеүселәрҙең күплеге бөгөн ғәҙәти хәлгә әйләнеп бара. Нәҡ ана шуның һымаҡ уҡ, боронғо беҙҙең ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең ғүмерлек дуҫы - ат тип аталған хайуанды ла бик яҡшы белгәндәр, тип уйлайым әле мин. Һәр төрлө гәзит-журналдарҙа, китаптарҙа ат тураһында күп яҙыла. Лөғәтебеҙҙә лә был исем тәрән урын алған: бөгөн бөтә Ер йөҙөндә техника заманы хөкөм һөрөүенә ҡарамаҫтан, был хайуанды бырыбер йыш ҡына телгә алабыҙ. Хатта ысын атты тик телетапшырыуҙарҙа ғына тиерлек күргән, ҡалала йәшәгән йәкташтарыбыҙҙың да теленән төшмәй был төшөнсә.**

Ни өсөн һүҙемде автомобилдәр хаҡында башлап, артабан сурытмаҡсы булдым? Моғайын, минең менән күптәр ризалашыр: автомобилде "машина" тип кенә атау етмәй. Уның төрө, марҡаһы һәм башҡа күп кенә айырмалыҡтары күп булған һымаҡ уҡ, аттың да атамалары бихисап. Атайым мәрхүм Һөйөндөков Төхфәтулла бер ҡасан да техникаға яҡынламаны (хатта ябай ғына матайы булманы). Уның ҡарауы, ғүмер буйы совхозда ветеринар булып эшләне. Утыҙынсы йылдар аҙағында Троицк ветеринария институтында веттехник курсында уҡыған атайым. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ул эшләгән Баймаҡ совхозының йылҡысылыҡ заводы Башҡорт атлы кавалерия дивизияһына менәрләгән ат әҙерләп ебәреп торған. Атайымдың: "Аттар алып китергә килгән хәрби ветеринар врач бер айғырҙа күрһәтеп, уны Таһир Кусимовтың үҙенә тәғәйенләп алып барасағы хаҡында әйтте. Шул айғырҙы мин көйҙөрҙөм..." - тип һөйләгәнен хәтерләйем. Атһыҙ бер көн дә тиерлек тора алмаған атайымдың йылҡы малы хаҡындағы һүҙҙәренең байтағын хәтерләп ҡалғанмын. Шуға һәм башҡа мәғлүмәттәргә таянып, ат хаҡындағы фекерҙәрем менән бүлешмәксемен.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ПРЕМИЯҒА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ

# ҺӨНӘРЕ - ТАБИП,

## һөйгәне... журналистика



**Заманында табип һөнәрен һайламаһа, ул бөгөн, һис шикһеҙ, әллә нисә китап авторы - танылған яҙыусы йәки олпат журналист булыр ине. Хәйер, ул бөгөн дә, әлбиттә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә танылған журналист кимәленә күтәрелә алды.**

Хәрби табип булараҡ, әрме сафында хеҙмәт итеүсе һалдаттарҙы дауалаһа, аҙмаларындағы хәтирәләренән сығып, уның тән дауалаусы табип ҡына түгел, ә ватан һаҡсыларын тоғро, намыҫлы һәм ихтыярлы булырға өйрәтеп, йәндәрен дауалаусы ла булғанлығы күренә. Кеселекле, кешелекле булыуы, бай тормош тәжрибәһе, йор һүҙлелеге, күҙәтеүсәнлеге ярҙам иткәндер уға был йәһәттән, моғайын. Һалдат та бит ҡәтғи командаға ғына түгел, яҡшы һүҙ, яҡты йөҙгә лә мохтаж. Был, тимәк, һөнәр итеп табиплыҡты һайлаған хәрбиҙең үҙ хеҙмәт бурысына ижади мөнәсәбәте, бай рухлы шәхес булыуы хаҡында һөйләй. Һәм, ғөмүмән, ижад ҡомарлы кешеләр тап шундайҙарҙан була ла инде.

Исем-шәрифен әйтмәйерәк торһам да, һүҙҙең кем хаҡында барғанлығын аңлағанһығыҙҙыр, тием. Гәзитебеҙҙең иң уҡымлы, ҡыҙыҡлы мәҡәләләре авторы Хәлил уҙаман Һөйөндөков ул, әлбиттә! Тыуған иленән, милли мөхитенән ситтә, алыҫта хеҙмәт итеүенә ҡарамаҫтан, бәгзе берәүҙәр кеүек, әсә телен, иманын онотоп, эшләгән ерендә тороп ҡалмай. Үҙ тиңе, башҡорт һылыуы менән матур ғаилә ҡороп, бергә хеҙмәт итеп, отставкаға сыҡҡас, тыуған яҡҡа ҡайтып төпләнә. Тәбиғи таланты, халҡына әйтер һүҙе лә тартҡандыр уны иленә. Тән һәм йән имсеһе хәйерле сәғәттә ҡулына ҡаурый ала һәм тиҙҙән "Киске Өфө" биттәрендә уның быға саҡлы күрелмәгән, яҙылмаған һәм шуға күрә уҡылмаған халыҡсан, тормошсан сәхифәләре баҫыла башланы һәм гәзитебеҙҙең йәненә, йәменә әүерелде. Тән имсеһенең, ысынлап та, йән име булыруай фәһемле темалар күтәреүе, шуның өҫтөнә, яҙмаларының һутлы, халыҡсан теле һәм үҙенсәлекле яҙыу стиле йәһәтенән айырылып тороуын танымау мөмкин түгел ине.

Хәлил Һөйөндөков бигерәк тә әхлаҡ-тәрбиә проблемаларына ҡағылышлы мәҡәләләре менән билдәлелек яуланы һәм уҡыусылар күңелен әсир итте. Әҙәп, сабыр холоҡ, иплелек, илһөйәрлек, телһөйәрлек кеүек сифаттар заманыбыҙҙың маңҡортлоҡ, битарафлыҡ, бәғерһеҙлек кеүек агрессив тулҡынында юғалып ҡалыу хәүефе янаған был көндәрҙә халҡыбыҙға үҙ асылына, ата-бабаларыбыҙ тәрбиәһенән килгән әхлаҡи-рухи мираҫыбыҙға тоғролоҡ турһында саң ҡағыу, оран һалыу нисек кәрәк бөгөн! Ошо йәһәттән Хәлил Һөйөндөковтың һәр мәҡәләһе, һәр сығышы ҡиммәт һәм көнүҙәк. Авторыбыҙҙың ғаилә ҡиммәттәре, бала тәрбиәләү, туғанлыҡ һәм нәҫел ептәрен һаҡлау, шәжәрәңде өйрәнеү, белемгә, алдыңа ҡуйған маҡсатҡа ынтылыш, тормош һынауҙары алдында ныҡлыҡ, рухи хазиналарыбыҙ хаҡындағы мәҡәләләре тормошсан миҫалдар аша асып бирелеүе, халыҡсанлығы менән алдыра һәм шуның өсөн дә уҡыусы күңеленә яҡын. Йыш ҡына был мәҡәләләр буйынса күтәрелгән темалар гәзит уҡыусыларыбыҙҙың хаттарында дауам итеlә һәм "Шаңдау" рубрикаһында һөйләшеү дауамын таба.

Хәлил Һөйөндөковтың Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика журналистар премияһына тәҡдим ителеүе хаҡындағы хәбәрҙе ҡыуанып ҡабул иттем. Тап ана шундай туған телебеҙ, әхлаҡи ҡиммәттәребеҙ һағында торған илһөйәрҙәр лайыҡ та инде был премияға. Хәйерле сәғәттә!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларын йыйыу тамамлана. Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов оператив кәңәшмәлә хәбәр итеүенсә, бөгөнгә майҙандарҙың 84 проценттан ашыуы һуғылған, был 1,470 миллион гектар. Тулайым урып һуғылған иген 4,3 миллион тонна тәшкил иткән, уртаса уныш - гектарынан 29,3 центнер. "Иген һаҡлағыстар етмәй, шуға аграрийҙар уңышты баҫыуҙарҙа уҡ ҡалдырырға мәжбүр. Һаҡлағыстар иҫәбен арттырырға кәрәк", тип билдәләне ведомство етәксеһе.

✓Башҡортостандың Финанс министрлығы ағымдағы йылға республика бюджетын 15,4 миллиард һумға арттырырға тәҡдим итте. "Һалым һәм һалым булмаған килемдәр буйынса план арта, тине Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры - финанс министры Лира Игтисамова. - Федераль бюджеттан өҫтәмә рәүештә 7 миллиард һум буленә". Өҫтәмә аҡса социаль түләүҙәргә, Республика адреслы инвестиция программаһына, Юл фондына тәҙәтмәләр индереүгә йүнәлтелә.

✓Илдә ҡарабойҙайҙан юғары уңыш көтөлә. Башҡортостанда был культураның уңышы һәйбәт, гектарынан 12,9 центнер тәшкил итә, тип хәбәр итә республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте. Башҡортостан - әлеге культураны үҫтереү буйынса алдынғы төбәктәр иҫәбендә. Алтай крайы, Курск, Воронеж һәм Орел өлкәләре менән бер рәттән, тулайым йыйымдың яҡынса 75 проценты беҙҙең республикаға тура килә. Башҡортостанда ҡарабойҙай майҙандарының 45 процентан ашыуы һуғылған, тулайым һуғып алыу 42,5 мең тонна тәшкил иткән.

✓Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәренә ярашлы, Күгәрсен, Мәләүез һәм Федоровка районларында 5-се класлы янғын хәүефе күҙәтелә. Ведомствола янғын йәһәтенән хәүефле осорҙа хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре турһында иҫкә төшөрәләр: урманда йәки торф яҡтылыҡтарында (хатта һыу яҡтылыҡтары янында) усаҡ яғырға; баҫыуҙа йәки аҡланда ҡоро үләнгә ут төртөргә; һүндерелмәгән тәмәке төпсөгө йәки шырпы ташларға; урманда автомобилдә, мотоциклда йөрөргә ярамай.

✓ *Башҡортостан музейы проектында музей комплексы, фәнни үҙәк, ҙур булмаған ипподром, һабантуй һәм күсмәндәр уйындарын уҙғарыу урыны, умарталыҡ, һыу тирмәне, ландшафтлы амфитеатр эшләү планлаштырыла.*



ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛ СПОРТЫНА

**Быйыл Башҡортостандың 20 районында 50 тренерға "Ауыл тренеры" республика программаһы буйынса 600 мең һум аҡса тапшырыла.** Башҡортостан - Рәсәйҙә ауыл ерәнә тренерҙарҙы йәлеп итеү тәжрибәһен индергән тәүге төбәк. Радий Хәбировтың башланғысы менән 2020 йылда республикабыҙҙа "Ауыл тренеры" программаһы эшләй башланы. Программала ауыл ерендә балалар менән эшләгән спортсылар ҡатнаша. Контракт шарттарына ярашлы, ауылда кәмендә биш йыл эшләгән белгестәр 600-шәр мең һум аҡса алыу мөмкинлегенә эйә. Аҡсаны торлаҡ йәки йорт төҙөүгә ер участкаһы һатып алыу өсөн тотонорға була. 2020 йылда бындай түләүҙе - 34, былтыр иһә 20 ауыл тренеры алған. 54 тренер ауылда ҡалған.

✓ **2022 йылдың 13 сентябрендә "Авангард" хәрби-патриотик тәрбиә биреү үҙәгендә Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатов исемендәге күсмә кубокка "Йәйге шайморатовсылар уйындары" уҙғарылды.** Унда Күмертау ҡалаһы 10-сы урта мәктәбенең шайморатовсылар класы командаһы еңеү яуланы. Иң етеҙ 20 команда иҫәбендә Архангел, Белорет, Благовар, Йылайыр, Илеш, Ҡалтасы, Кушнаренко, Стәрлебаш, Тәтешле, Нуриман, Өфө районддары һәм Межгорье, Салауат, Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалаларының шайморатовсылар кластары ла бар. 2022-2023 уҡыу йылында Башҡортостан Республикаһының дөйөм белем биреү ойошмаларында 79 шайморатовсылар класы асылған. Еңеүселәр Республика көнөндә Өфөлә Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл асыу һәм шайморатовсылар сафына алыу тантанаһында ҡатнаша.

✓ **Өфөгә Ташкент көндәренә әҙерләнеү өсөн Үзбәкстан делегацияһы килде. Сара октябргә билдәләнгән.** Башҡортостан Республикаһының тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева һөҙҙәренсә, Ташкент көндәре сиктәрендә Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында эшлекле һәм мәҙәни саралар: Үзбәкстан контрагенттары менән осрашыуҙар, урындағы бизнес ҡатнашлығында түңәрәк өҫтәлдәр, профилле предприятиеларға барыу, биҙәү-кулланма сәнғәте күргәҙмәләре һәм ике республиканың ижади коллективтары ҡатнашлығында ҙур концерт программаһы планлаштырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала сәнәғәт предприятиелары төҙөү буйынса, шул иҫәптән ауыл хужалығы сеймалы етештереү һәм эшкәртеү, туризм өлкәһендә берлектәге инвестиция проекттары билдәләнгән. Тышҡы сауҙа әйләнешенең дә үҫеше күҙәтелә, йыл башынан алып ул 6,9 процентҡа артҡан.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КҮСМӘНДӘР ЦИВИЛИЗАЦИЯҺЫ МУЗЕЙЫ...



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың Күсмәндәр цивилизацияһының Евразия музейын булдырыу инициативаһы менән сығыш яһауы хаҡында күптәр хәбәрҙарҙыр, моғайын. 8 сентябрҙә был объекттың ойоштороу мәлдәре буйынса кәңәшмә үтте. Сарала министрлыҡтар һәм ведомстволар, археология һәм туризм буйынса эксперттар, шулай уҡ проект ойошмалары һәм бизнес-йәмғиәт вәкилдәре ҡатнашты.**

Шишмә районының Турахан кәшәнәһе урынында төҙөргә планлаштырылған музей проектын "Архтамға" эксперт-проект бюроһы башҡара. Оҡшаш объекттарҙы өйрәнеү өсөн белгестәр Үзбәкстанға ла барып ҡайтҡан. Асыҡлаunion, бындай кәшәнәләр ҡаланың йәнле урынында урынлашҡан булған - уның эргәһендә сауҙа майҙандары, мәҙрәсәләр, мәсеттәр урын алған. Шуға күрә Башҡортостан музейы проектында музей комплексы, фәнни үҙәк, ҙур булмаған ипподром, һабантуй һәм күсмәндәр уйындарын уҙғарыу урыны, умарталыҡ, һыу тирмәне, прогулка зонаһы, ландшафтлы амфитеатр, бәләкәй кәшәнә өҫтөндә археологик "тәҙрә", төҙәкләндерелгән шишмә эшләү планлаштырыла. Музей концепцияһы бронза дәүеренә аттарҙы ҡулға эйәләштереүҙән алып һуң урта быуатҡа тиклем осорҙо күрһәтеүҙе күҙаллай. Әлеге ваҡытҡа белгестәр проектлау территорияһын тикшергән, урындың рельефын фотоға төшөргән, лазер сканин эшләгән, тарихи белешмә йыйып, уларҙы өйрәнгән.

Археолог, тарих фәндәре кандидаты Әлфиә Солтанова киләсәктә музейҙың Евразия далаһы күсмәндәрен өйрәнеү үҙәге булырына инана. "Бик шәп уйланылған. Минеңсә, ваҡыт үткәс, ул иртә һәм урта быуат күсмәндәрен тикшереүҙән үҙенсәлекле ойошмаһына әүерелергә тейеш, сөнки Көньяҡ Урал территорияһында улар бик күп булып, Урал һәм Волга буйында йәшәгән башҡорт, башҡа халыҡтарҙың формалашыуында ҙур роль уйнаған. Был һөҡланғыс башланғыс, мин уның эҙләнеүҙәрендә ҙур теләк менән ҡатнашыр, коллегаларым менән тәжрибә уртаҡлашыр инем. Бер генә археолог та бындай эштән баш тартмаҫ, тип уйлайым", - ти ул.

**Иван ВАВИЛОВ.**

# ХАҠТАР АРТА...

**Башҡортостан статистиктары белдереүенсә, республикала ҡайһы бер социаль әһәмиәтле продукттарға хаҡ артһа, икенселәренә кәмегән.**

Яңы уңыш осоро бит - башлы һуғандың хаҡы 13,2 процентҡа төшөп, уртаса килограмы 32 һум тора. Шулай уҡ кишергә лә хаҡ кәмегән (12,5 процент, килограмы 30 һум). Ҡыҙыл сөгөлдөрҙөң килограмы 26 һум (8,4 процентҡа кәмегән). Шулай уҡ пастеризацияланған һөт, банан, һарыҡ ите, эремсек, сырҙар, ҡаймаҡ, тауыҡ, дөгө, маргарин, печенье, ҡарабойҙай ярмаһы, вермишель, тары ярмаһы, ҡыяр һәм помидор, кәбеҫтә, балалар туҡланыуы өсөн ҡоро һөт ҡатнашмалары, картуфҡа хаҡтар 0,2-7 процентҡа төшкән.

Киреһенсә, балалар туҡланыуы өсөн йәшелсә консервалары аҙнаһына 5,3 процентҡа артып, килограмы 631 һумға еткән. Шәкәргә, балалар туҡланыуы өсөн ит консерваларына, аҡ майға һәм көнбағыш майына, туңдырылған балыҡҡа, арыш икмәгенә, арыш менән бойҙай оно ҡушып бешерелгән икмәккә, онға, стерилләнгән һөткә, алмаға, сосискаға, сарделькаға, сусҡа итенә, балалар туҡланыуы өсөн емеш-еләк консерваларына, тоҙға, шоколад кәнфиттәренә, барлыҡ төр колбасаларға, йомортҡаға, ҡара сәйгә һәм макаронға хаҡтар бер аҙнала 0,1-4,4 процентҡа артҡан. Ошо арауыҡта бары тик бойҙай икмәгенә һәм ҡаластарға ғына хаҡ артмаған, уларҙың килограмы уртаса 82 һум килеш ҡалған.

**Галина БАХШИЕВА.**

# ЕҢГӘНҺЕҢ ИКӘН...

**Башҡортостанда Бөтөн Рәсәй йәки төбәк-ара олимпиадаларҙа еңеүсе йәки призер булған уҡыусылар республика Башлығы премияһына дәғүә итә ала. Уларҙы әҙерләгән уҡытыусыларға ла аҡсалата бүләк бирелергә тейеш.**

Мәғариф министрлығы хәбәр итеүенсә, 16 сентябрҙә республикала 2021-2022 уҡыу йылы йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Башлығы премияһына дәғүә итеүселәрҙән документтар ҡабул итеlә башлай. Уҡыусыларға һәм уларҙың остаздарына премиялар Радий Хәбировтың указы менән Бөтөн Рәсәй олимпиадаһында еңеүселәр, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән педагогтарға - 100 мең, призерҙарға 60 мең һум түләнә. Мәғариф министрлығы исемлегенә ингән олимпиада еңеүселәре һәм призерҙарына - 10 һәм 5 мең, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиада еңеүселәренә һәм призерҙарына 5 һәм 3 мең һум бирелә. Документтарҙы 2022 йылдың 30 сентябренә тиклем түбәндәге адресҡа ебәрергә кәрәк: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы, 450077, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Театр урамы, 5/2 (305-се бүлмә). Документтар электрон төрҙә ҡабул ителмәй.

# УЧАЛЫЛА - ТЕГЕҮ ФАБРИКАҺЫ

**1971 йылда асылған Учалы тегеү фабрикаһы "Эш кейеме комбинаты" компанияһының иң ҙур предприятиеларының береһе булып тора. Учалы районына эш сәфәре менән килгән Радий Хәбиров предприятиеның эшмәкәрлеге менән танышты**

Бында Рәсәй тимер юлдары, "Полюс Золото" компанияһы, Евросибэнерго һәм башҡа предприятиелар өсөн йәйге һәм ҡышҡы махсус кейем тегәләр. Йәмғеһе 602 кеше эшләй. 2014 йылда төҙөлгән яңы бинала тегеү цехтары урынлашҡан. Фабрика директоры Фәйрүзә Степаненко һүҙҙәренсә, предприятие юғары технологиялы ҡоралмалар менән йыһазландырылған. Әйберҙәр техник шарттарға һәм ГОСТ-тарға ярашлы әҙерләнә. Изделиеларҙың ассортименты төрлө - 300-ҙән ашыу. Төрлө ведомстволар, сәнәғәт предприятиелары, медицина һәм мәғариф учреждениелары, һунарсылар һәм балыҡсылар өсөн ярым йән, ҡатнаш туҡыманан тегелгән йәйге һәм ҡышҡы кейем, мәктәпкәсә һәм шифахана-курорт ойошмалары өсөн йомшаҡ инвентарь, кадет кластары өсөн костюмдар.

Радий Хәбиров предприятиеның цехтарын ҡараны, тегеүселәр менән аралашты. Фабрика директоры Радий Хәбировҡа Рәсәй армияһы өсөн ҡышҡы кейем өлгөһөн күрһәтте. Уның һүҙҙәренсә, тиҙҙән Оборона министрлығы комиссияһы быны ҡабул итергә тейеш. Фәйрүзә Степаненко республика етәксеһенән предприятиеның яңы ҡаҙанлығына газ үткәреүҙе тиҙләтеүҙә ярҙам һораны. "Газпром төбәк-ара газ Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең Белорет филиалы директоры Ринат Фаршатов Радий Хәбировты ҡаҙанлыҡҡа газ үткәреү эштәрен 20 сентябргә тамамларға вәғәҙә бирҙе. "Мин бер нисә тапҡыр һеҙҙең фабрикаға барып ҡайтырға йыйынғайным, бөгөн күргәндәрем мине хайран ҡалдырҙы. Фабрикаyың заказдары күп, беҙ артабан да предприятиены үҫтереүгә ярҙам итергә, тейешле субсидиялар бүлергә әҙербеҙ", - тине Радий Хәбиров.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓24 сентябрҙә Өфөлә "Йәшел Башҡортостан" акцияһы ойоштороla, йәмәғәт биләмәләрен, ихаталарҙы тәртипкә килтереү, ағастар, ҡыуаҡтар ултыртыу күҙаллана. Өфө хакимиәте телеграм-каналда тауыш биреү иғлан итте: халыҡҡа #өфөнөйәшелләндереү хэштегы буйынса үтеп, үҙ районына йәшелләндереү төрөн һайларға тәҡдим итәләр. Өфөлә "Йәшел Башҡортостан - Өфө" сайты ла эшләй. Баш ҡала халҡы ағастарҙы ултыртыу урыны, уларҙың төрҙәре тураһында тәҡдимдәр индерергә мөмкин.

✓Өфө илдең иң йәшел миллионлы ҡалалары рейтингында өсөнсө урынды яуланы, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Бындай тикшереүҙе "Роскосмос" белгестәре үткәргән. Беренсе урында - Пермь, икенселә - Екатеринбург. Йәшелләндереүҙең иң түбән кимәле Краснодарҙа. Өфөнө артабан төҙәкләндереү һәм йәшелләндереү йәһәтенән төп маҡсат - бер йыллыҡ сәскәләргә һәм үҫемлектәргә ҡарағанда күп йыллыҡтарға, ҡыуаҡтарға һәм ағастарға өҫтөнлөк биреү, яңы аллеялар булдырыу һәм булғандарын киңәйтеү.

✓Өфөлә "Терра Башҡортостан" ат спорты турниры финалы еңеүселәре иғлан ителде. Өфө ипподромында уҙған турнирҙың финалында башҡорт тоҡомло аттарҙа 16 һыбайлы 1400 метр араүыҡта сабышты. Беренсе урынды Бүҙәк районынан Оскар Ҡушаматлы атта Фидан Ғәйфуллин яуланы. Баймаҡ районынан Илназ Солтанғәрәев һәм Күгәрсен районынан Рафаэль Курбанаев икенсе һәм өсөнсө урындарҙы бүлеште. Еңеүселәр кубоктар һәм аҡсалата призлар менән бүләкләнде. Быйыл турнирҙың бүләк фонды 10 миллион һум тәшкил итте.

✓Республикаға идара итеү үҙәгендә уҙған оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров 9 сентябрҙә "Меркурий" сауҙа-күңел асыу комплексында булған янғынға йомғаҡ яһаны. "5400 квадрат метр майҙанда "Меркурий" сауҙа-күңел асыу комплексының ҡыйығы, сауҙа нөктәләре уттан зыян күргән. Һәләк булыусылар юҡ. Янғынды һүндереүгә 190 кешенән һәм 54 берәмек техниканан торған төркөм, шул иҫәптән республиканың Ка-32А11ВС янғын-ҡотҡарыу вертолеты йәлеп ителгән", - тине Фәрит Ғүмәров.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Быйыл башҡорт дәүләт теле уҡытыу программаһының төп өлөшөнә индерелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм "Республикала балаларҙың туған телен өйрәнеүгә конституцион хоҡуҡтары яҡланған", - тине министр.*

КӨНАУАЗ

# ТУҒАН ТЕЛЕНӘН...

## мәхрүм булмаһын бала!



(Башы 1-се биттә).

Полилингваль гимназиялар асылған тәүге йылдарҙа халыҡтың ҡарашы төрлө булыуға ҡарамаҫтан, баш ҡалалағы белем усаҡтары ошо ҡыҫҡа ғына арауыҡта башҡорт телендә лә уҡытҡан алдынғы учреждение булыуҙарын иҫбатлай алды. Мәҫәлән, Өфөнөң Дим районында урынлашҡан 2-се "СМАРТ" республика полилингваль күп профилле гимназияһында быйыл башҡорт-инглиз йүнәлешендәге төркөмгә 38 беренсе синыф уҡыусыһы ҙур конкурс үтеп йыйылған. "Тәүге тупланған бындай төркөм балалары быйыл 3-сө синыфта уҡый, улар башҡорт, урыҫ, француз һәм инглиз телдәрен тәрәнәйтеп өйрәнә. Быйыл 2-се синыфта булған бер класс шулай уҡ инглиз-башҡорт төркөмө иҫәпләнә, улар был телдәрҙе 3-әр сәғәт уҡый. Быйыл тағы ла инглиз-башҡорт класына балалар йыйҙыҡ. Беҙгә бөгөн иң мөһиме бер нисә тел белгән, юғары тәжрибәле педагогтар кәрәк. Мәҫәлән, математиканы урыҫ һәм инглиз телдәрендә, йәмғиәтте өйрәнеү предметын башҡорт һәм урыҫ телдәрендә уҡыта алырлыҡ белгес булыуы бик мөһим, шулай уҡ күп телдәр белгән башланғыс синыф уҡытыусыларына ла мохтажлыҡ бар. Радий Фәрит улына был турала әйттек, ул үҙе лә кадрҙар мәсьәләһен хәл итеүгә иғтибар бүләсәген белдерҙе. Ә бына форум барышында беҙ эшләгән майҙансыҡта Ҡаҙандың полилингваль гимназия-интернаты директоры килгәйне, уларҙың тәжрибәһе лә ҡыҙыҡлы тойолдо: был гимназияла тик ҡыҙҙар ғына белем ала. Уларға төрлө телдәрҙе өйрәтеү генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарға тормошта кәрәк буласаҡ аш-һыу бешереү, ҡул эштәре оҫталығы, мода кеүек үҙенсәлекле дәрестәр ҙә ҡаралған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың милләтте һәм ғаиләлә телде һаҡлауҙа төп ролде уйнауын иҫәпкә алғанда, бындай тәжрибәнең һөҙөмтәләре уңышлы ла булыр кеүек", - тип фекерҙәре менән бүлеште белем усағы етәксеһе Наил Әминев.

БР мәғариф министры Айбулат Хажин республикала дәүләт телдәрен уҡытыу буйынса эш һөҙөмтәләренә ҡыҫҡаса байҡау яһаны һәм быйыл башҡорт дәүләт теле уҡытыу программаһының төп өлөшөнә индерелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Башҡортостан үҙ мәктәптәрендә ике дәүләт телендә лә уҡытыуҙы ойошторған тәүге төбәктәрҙең береһе булды. Мониторинг һөҙөмтәләренә ярашлы, республика уҡыусыларының 75 проценты башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнә. 97 процент уҡыусы теге йәки был телде туған тел булараҡ һайлап белем ала. Шулай итеп, республикала балаларҙың туған телен өйрәнеүгә конституцион хоҡуҡтары яҡланған", - тине министр. Уның сығышын тыңлағандан һуң Радий Хәбиров мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре һәм туған тел уҡытыусыларына бирелгән матди ярҙам күләмен арттырырға ҡушты.

Форум барышында башҡорт телен уҡытыуҙы заманса ойоштороу, яңы алымдар, цифрлы технологиялар мөмкинлектәрен ҡулланыуға ла ҙур иғтибар бүленгәйне. Республиканың төрлө белем усаҡтарының һәм балалар баҡсаларының бындай эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу маҡсатында күргәҙмәләр ойошторолдо. Уларҙа Өфө ҡалаһының 308-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәселәренең үҙ ҡулдары менән булдырған күрһәтмә-ҡулланыу әйберҙәре, Башҡорт дәүләт университеты проекттары, баш ҡаланың йәкшәмбе мәктәптәре һәм башҡалар ҡатнашты. Гәзитебеҙҙә күптән түгел сығыш яһаған "Якласс" цифрлы белем биреү сығанағының төбәктәге вәкиле Морат Ишемғолов менән башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса проектты тормошҡа ашырыусы педагогтарҙың береһе, Борай 2-се гимназияһы уҡытыусыһы Ләйсән Муллағәлиева ла үҙҙәренең эш тәжрибәһен күргәҙмәлә сағылдырҙы. "Форумда коллегаларыма "Якласс" тураһында һөйләнем һәм эшебеҙҙе еңеләйтеү маҡсатында был платформаның ни тиклем уңайлы булыуын аңлаттым. Элек башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса шундай заманға ярашлы яңылыҡтар булмауы бәкәлгә һуға торғайны, хәҙер эшебеҙҙе төрләндерә һәм еңелләштерә, уҡыусыларҙы ҡыҙыҡтыра алабыҙ. "Якласс" бигерәк тә дистанцияла уҡыған саҡта ярҙам итте. Артабан да башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына ошо цифрлы сығанаҡты ҡулланыу мөмкинлектәрен арттырыу йәһәтенән эшебеҙҙе дауам итәсәкбеҙ", - ти Ләйсән Ришат ҡыҙы.

Туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының төбәк-ара форумында ошо юҫыҡта оҙаҡ йылдар тырышып эшләгән, киләсәк быуындарҙы телһөйәр, илһөйәр итеп тәрбиәләүгә бар көсөн һалған педагогтарҙы тәбрикләп тә үттеләр. Улар араһында барыбыҙға ла оҙаҡ йылдар Өфө ҡалаһының М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһын етәкләгән директор булараҡ билдәле Гөлназ Әхмәҙиева Салауат Юлаев орденына лайыҡ булды, был гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Айгөл Игелекова Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Күмертау ҡалаһынан педагогик хеҙмәт ветераны Хәҙисә Кинйәбаева Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы, БДУ-ның Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларының төбәк-ара форумы йылдағыса бик мөһим мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшергә, мәғариф хеҙмәткәрҙәре һәм ил етәкселәре араһында бәйләнештәр булдырырға, тәжрибә уртаҡлашырға ярҙам иткән мөһим майҙансыҡ булыуын иҫбат итте. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың үҙ сығышында туған телде йәш быуынға өйрәтеп үҫтереү ғаиләнән башланыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыуы бушҡа түгел. Мәктәптәр төҙөлөр, уҡытыу ойошторолор, әммә бөгөн атай-әсәйҙәрҙең аңлы булыуы, балаларын үҙ туған теленән мәхрүм итмәүе бигерәк тә актуаль булып ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҠЫҪҠАСА

# САУҘАГӘРҘӘР МУЗЕЙЫ УРАМЫМЫ?

✓ **"Өфө муйынсағы" проекты етәксеһе, урбанист Әнүәр Байков Октябрь революцияһы урамын сауҙагәрҙәр музейы урамы итеп эшләргә тәҡдим итә.** "Бында элек сауҙагәрҙәр, алпауыттар йәшәгән һәм улар менән бәйле урам үҙе үк тарих һөйләп торасаҡ", ти ул. Был урам баш ҡаланың 450 йыллығы уңайынан реконструкцияланасаҡ объекттар исемлегенә инә. "Күптән түгел беҙҙең НКО Суперновтың арт-илселеге менән берлектә Өфөнөң быға тиклем иғтибар бирелмәгән тарихын һәм легендаларын эҙләү буйынса тикшеренеү үткәрҙе һәм улар Өфө бинаһары фасадын биҙәү буйынса рәссамдарҙың эштәре нигеҙенә ятыуы ихтимал. Шундай урамдарҙың береһе башта Оло Репная булған, һуңынан Оло Ҡаҙан тип үҙгәртелгән. Хәҙер ул Октябрь революцияһы исемен йөрөтә. Урамдың Оло Ҡаҙан урамы тип аталыуы Ҡаҙан юлының тап ошонан башланыуы менән аңлатыла. Ҡасандыр ул ҡаланың төп урамы була һәм Өфөнөң иҫке өлөшөн яңыһы менән бәйләп тора.

✓ **Өфөлә 44-се һәм 162-се полилингваль күп профилле мәктәптәр 1-се республика полилингваль күп профилле гимназияһы һәм 2-се "СМАРТ" республика полилингваль күп профилле гимназияһы тип үҙгәртелде.** Республиканың Мәғариф һәм фән министрлығында белдереүҙәренсә, ошо дөйөм белем биреү учреждениелары муниципаль милектән дәүләттекенә күсерелгән, хәҙер улар Башҡортостан Мәғариф министрлығы ҡарамағында. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда полилингваль күп профилле мәктәптәр селтәре 2019 йылда республика Башлығы Указына ярашлы ойоштороло башланы. Уларҙың дүртәүһе 2019-2021 йылдарҙа Өфөлә (44-се һәм 162-се мәктәптәр), шулай уҡ Стәрлетамаҡ һәм Нефтекама ҡалаларында асылды. 2024 йылға республикала 14 полилингваль мәктәп үҙ ишектәрен асырға тейеш. Республика полилингваль күп профилле гимназияларҙың уставтарына ярашлы, уҡытыу һәм тәрбиә биреү рус, башҡорт, инглиз телдәрендә алып барыла. Гимназияларҙың төп үҙенсәлеге - билингваль һәм полилингваль белем биреү.

✓ **Рәсәйҙә сәнәғәт ипотекаһы программаһы - предприятиеларға сәнәғәт производствоһын тормошҡа ашырыу өсөн күсемһеҙ милек һатып алыуға льготалы кредит биреү программаһы башлана.** Премьер-министр ярҙам ҡоралының параметрҙарын раҫлаған ҡарарға ҡул ҡуйған. Сәнәғәт ипотекаһы программаһы сиктәрендә кредит йылына 5 процент льготалы ставка менән ете йылға тиклем бирелә. Технологик компаниялар өсөн ставка тағы ла түбәнерәк - йылына 3 процент ҡына. Кредиттың максималь күләме - 500 миллион һум. Етештереү өсөн әҙер майҙандар һатып алырға йыйынған предприятиеларҙың ошондай ипотека алырға хоҡуғы бар. Сәнәғәт ипотекаһы программаһы һынау үткән төбәктәр иҫәбендә Башҡортостан да бар. Унда Өфө индустриаль паркы һәм "Алға" махсус иҡтисади зонаһы ҡатнаша.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Быуындағы тоҙҙан

❖ Был ысул быуындарға тоҙ ултырған осраҡта һыҙланыуҙарҙы баҫа һәм уларҙы сығарырға ярҙам итә. Дауаны әҙерләү өсөн 0,5 кг һөйәкһеҙ аҡ йөҙөм һәм кишер кәрәк. Йөҙөмдө ит турағыс аша, ә кишерҙе таҙартып, уртаса ҡырғыстан үткәрергә. Шунан эмалле һауытҡа һалырға һәм 7 стакан һыу ҡойоп, йым ҡапҡас ябып, 2,5 сәғәт һыу парында тоторға. Бер нисә ҡат марля аша һөҙөргә лә, 2 литрлыҡ банкаға күсереп ҡойорға. Төпрәһенә 1-2 стакан һыу ҡойорға, шунан һығып эсергә - был һыу ҙа файҙалы һәм тәмле. Ә әҙерләнгән 1,5 литр тирәһе дауа дауаланыу осорона етә. Уны иртәнсәк һайын ас ҡарынға, ашарҙан 30 минут алда 150 мл эсергә. Был рәүешле дауаланған саҡта йәшел йыуа, йәшел үҫемлектәр һәм кәбеҫтәне бөтөнләй ашарға ярамай. Ҡайнатманы һыуытҡыста һаҡларға. Шуны эсеп бөткәс, 10 көнгә туҡталып торорға һәм яңынан башларға. Был дауа матдәләр алмашыуы боҙолғанда, авитаминоз, күреү һәләте насарайғанда, атеросклероз булғанда ла файҙалы.

## Йөрәк аритмияһы

❖ 1-әр балғалаҡ ҡомалаҡ, валерьяна, һары мәтрүшкә (зверобой), розмарин, бөтнөк (мята) үләндәрен алырға. Килеп сыҡҡан йыйылмаға 1 стакан (200 мл) ҡайнар һыу ҡойорға һәм 15 минут һыу парында тоторға. Шунан һөҙөргә һәм ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр сирек стакан эсергә. Үләндәр нисбәтен теүәл самалау кәрәк, сөнки ҡомалаҡ ағыулы үҫемлек. Уны кәрәгенән артыҡ ҡулланғанда тын ҡыҫылыуы, йөрәк тапҡыры ауыртыуы, уҡшытыуы, баш ауырыуы, дөйөм хәлһеҙлек тойолоуы ихтимал.

❖ 1-әр балғалаҡ әрем, укроп орлоғо, бөтнөк, йүкә сәскәһе, эт муйылы (крушина) ҡайырыһын алып, 500 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30 минут төнәтергә. Дауаны иртәнсәк һәм кис йоҡлар алдынан яртышар стакан эсергә. Был да йөрәк аритмияһын дауалауҙа файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Башҡортостандың таулы төбәктәрендә эшләнгән ижауҙарҙа икенсе пландағы деталдәрҙе бөтөнләй эшләмәү ғәҙәте күҙәтелгән. Башҡортостан Республикаһының Милли музейында һаҡланған шундай беләү күрә тупаҫ итеп яһалған ижауҙарҙың береһендә һуҙылып киткән тотҡаһы ҙур ғына ике конуслы пирамида менән ослана һәм бер-береһенә "кейҙерелгән" мөйөштәр рәүешендәге һыр менән ҡапланған. Уның ике яғынан күтәрелгән ишмәле таяуҙары, үтә тишектәр хасил иткән "күҙҙәр" оҙон муйынлы хайуанды һынландырған төҫлө. Оҫтаның фантазияһы башҡа образдарҙы ла күҙалларға ирек бирә: үҙәк һын әкиәттәрҙән килгән антропоморф зат кеүек. Ижауҙың тотҡаһындағы һырлау алымына ҡарағанда, уны бөрйәндәр эшләгән.



*Ҡымыҙ ижауы һәм туҫтаҡтар. БР ММ фондынан*

Өфө ҡалаһы музейҙарының этнография коллекцияларында эшләнгән урыны билдәһеҙ булған ижауҙар бихисап. Улар араһында юғары сәнғәт өлгөһө булған ҡиммәтле әйберҙәр бар. Ырымбур ҡалаһының төбәк тарих-крайҙы өйрәнеү музейында беҙ һорғолт (серый) төҫлө сөм ижауға иғтибар иттек, уның тура тотҡаһын ике яҡлап һоҫанан алып эре ҡусҡарҙар күтәрелә. Был ижауҙың биҙәлеше Түбәнге Ташбүкәндәгеләргә оҡшаш, бәлки, шунан килтерелгән дә булғандыр.



*Ғафури районынан сылбырлы ижау. РЭМ фондынан*



*Ҡымыҙ туҫтағы һәм бүлеп ҡоя торған ҡалаҡ. Ишембай районы, Ураҙбай ауылы, 1978 йыл. Т.К. Сурина фотоһы.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*АТАЙҘАР БЕЛЕМЕ*

# АТ ИТЕМЕ, ӘЛЛӘ ЙЫЛҠЫ ИТЕМЕ?



**(Башы 3-сө биттә).**

Бөгөнгө көндә күптәребеҙ уны "ат" тип кенә белеүебеҙ, минеңсә, был хайуан хаҡында бер ни ҙә белмәүгә тиң тиерлек. Әйтәйек, "Ҡымыҙҙы нимәнән яһайҙар?" тигән һорау биргән хәлдә, күптәр бөгөн һис уйлап тормаҫтан: "Ат һөтөнән",- тип яуап ҡайтара. Ә бынан илле-алтмыш йылдар самаһынан элегерәк беҙҙең ҡартатайҙарыбыҙға бының һымаҡ яуап бик ирмәк тойолор ине. "Нишләп ат һөтөнән булһын, ҡымыҙҙы бейә һөтөнән яһайҙар бит!" - тип мотлаҡ төҙәтерҙәр ине. Ә кемдер берәү: "Барыбер түгелме ни?"- тип һорар. Ҡәҙерле милләттәштәр, барыбер түгел икән шул. Боронғо ҡартатайҙарыбыҙ "ат" тигән һүҙҙе айырым осраҡтарға дөйөм исем итеп ҡулланған (ат егеү, ат менеү, ат сабыштырыу, ат эсереү, ат йөҙҙөрөү һ.б.). Бынан тыш, көйҙөрөлгән (бестерелгән) айғырҙы ла "ат" тип атағандар. Элегерәк бабайҙарҙан ниндәйҙер ат хаҡында "Айғырмы?" тип һораһаң: "Юҡ, ат ул, быйыл яҙ ветеринарға әйтеп көйҙөрттөк, көҙгә һуғымға һимертергә ниәтләйбеҙ", - тигән һымағыраҡ яуап ала торғайныҡ (ә беселмәгән икән, әлбиттә, "Эйе, айғыр", тигән яуап булыр ине). Беселгән үгеҙ, тәкәне лә "ат үгеҙ", "ат тәкә" тигәндәрен йыш ҡына ишеткеләй торғайным. Ә инә ат тураһында "байтал", шулай уҡ "бейә" һүҙен дә ҡулланалар.

Һуғымға ла "ат һуйҙыҡ" тип түгел, ә "йылҡы һуйҙыҡ" тип әйтәләр. Һуйылған итте лә "йылҡы ите" тип атау башҡортсараҡ була ("ат ите" түгел). (Сағыштырыу өсөн: урыҫта "лошадина" түгел, ә "конина" тип аталған һымаҡ).

Әлегерәк минең атайыма берәү "Атығыҙ ҡолонланымы?" тигән һорау бирһә, ул, юмор яратҡан кеше булараҡ, башта көлөп алыр ине, унан һуң мотлаҡ былай тип төҙәтер ине: "Ат ҡолонламай ул, ә бейә ҡолонлай..." "Ҡолонло бейә" йә "быуаҙ бейә", йә иһә "тыу (быуаҙ булмаған) бейә" тигән һүҙбәйләнештәр ҡулланыла, әммә, "ҡолонло ат, быуаҙ ат, тыу ат" түгел. "Бейә бәйләү", "бейә һауыу"ҙы ла бер ҡасан да "ат һауыу" тигән һүҙбәйләнеш менән алыштырмайҙар. Боронғо башҡорттар "атсылыҡ менән шөғөлләнгән" тип берәү ҙә әйтмәй, шулай бит, ә "йылҡысылыҡ менән" тиҙәр. Шулай уҡ, "ат өйөрө" түгел, ә "йылҡы өйөрө" тибеҙ. Артыҡ ныҡ һуҙып, оҙаҡ итеп һөйләгән кешегә: "Йә, ат ҡолонлатмай ғына һөйлә", - тип әйткәндәр. Бында аттың оҙаҡ ҡолонлауы түгел, ә күпме көтһәң дә уның бөтөнләйгә ҡолонламауы күҙ уңында тотолған.

Аттың йәшенә ҡарап аталған исемдәре лә күп. Яңы тыуған ҡолонсаҡты - айғырсаҡ, ике йәшкә тиклемге тайҙы - иркәк, өс йәшлеген - ҡонан, дүрт йәшлеген - дүнән һәм артабан, көйҙөрмәһәләр, ул айғыр булып китә. Ә енесе инә булғанын ике йәшкә тиклем - тай байтал, өс йәшлеге - ҡонажын байтал (йә ҡонанса), дүрт йәшлеге - дүнәжен байтал, унан олоранын бейә тип атайҙар. Ауырға ҡалмай йөрөгән бейәне тыу бейә тип тә әйтәләр.

Төҫөнә ҡарап борон туры (гнедой), ерән, көрән, ала (пегий), күк, алма-сыбар, ҡола (саврасый) һымаҡ матур исемдәр биргәндәр атҡа. "Ҡола" тигәндәй, бына шундай төҫлө атта бер аҙ туҡталып китергә ниәтем. Һырты буйынса (ялынан ҡойроғона ҡәҙәр) ҡара һыҙатлы, аҡһылыраҡ һоро төҫтәге, бейек булмаған, әммә алдан артҡа ҡарай оҙон кәүҙәле беҙҙең башҡорт аттарын тап ана шулай тип атайҙар. Ошо турала мәғлүмәт эҙләгәндә, **Яңауыл ҡалаһы лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы етәкселегендә 5-се синыф уҡыусыһы Гөлфиә Миңлеғолова үткәргән "Башҡорт аты - халҡым ҡото" тип аталған эҙләнеү-тикшереү эшенә юлығып, шуға иғтибар иттем. Төрлө тарихи сығанаҡтарға таянып, бына нимә яҙған ул:** "...Башҡорт халҡында атланып йөрөргә менге аттар, санаға, арбаға егергә екке аттар һәм айырым яу аттары - яу сабырға әҙерләнгән аттар булған. Яу толпарҙары хәрби походтарҙа хужаларына тоғро иптәш һаналған. Башҡорт яугирҙарының дошмандарға ҡаршы алыштарҙа яулаған еңеүҙәрендә башҡорт аттарының көслө, ғәйәт сыҙамлы булыуы ла ҙур роль уйнай. Башҡорт аты 1812 йылғы Ватан һуғышында юғары баһа алған. Башҡорт ғәскәре ойошторолғанда ла башҡорт аты ҡулланылған, Рәсәй алып барған бөтә һуғыштарҙа рус армияһы башҡорт аты менән тулыландырылған. Француз генералы де Марбо үҙенең иҫтәлектәрендә былай тип яҙған: "...башҡорт һыбайлылары өсөн бер ниндәй юл да кәртә була алманы. Улар һағыҙаҡ күсе кеүек һис көтмәгән яҡтан килеп сығыр ине. Уларҙы ҡыуып етеү бик ауыр ине". Ғалим П.И. Рычковтың яҙыуынса, башҡорттар аттарын йәйен дә, ҡышын да тибендә далала йөрөткән. Ҡар нисек кенә ҡалын булмаһын, башҡорт аттары тояҡтары менән сапсып тибенеп, ҡар аҫтынан үҙҙәрен туйындырырлыҡ туң үлән тапҡан. Ҡышын егеүгә файҙаланған аттар өсөн бесән әҙерләнгән. Этнограф Руденко "Башкиры" тип аталған китабында: "Иң бай башҡорт 3-4 мең баш йылҡы тотһа, иң ярлыһы 20-30 баш йылҡыға хужа", - тип яҙған.

Күренекле башҡорт яҙыусыһы Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романында ла башҡорт атлы полктарының ҡаһарманлығы тасуирлана. Ғөмүмән, һәр әҙәби әҫәрҙә башҡорт аты башҡорт яугирының айырылғыһыҙ һәм тоғро юлдашы икәне һүрәтләнә. Хәрби белгестәр башҡорт атын ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге, тырышлығы һәм идара итеүгә еңеллеге, хужаһына ышаныслылығы, шулай уҡ оҙаҡ ваҡыт шәп сабып һәм йылдам юрғалап барыуға һәләтлелеге (ә был һыбайлыға мәргән атырға һәм ҡылыс менән оҫта эш итергә мөмкинлек бирә) кеүек сифаттары өсөн юғары баһалағандар. Башҡорттар бындай йөрөшкә сыҙамлы аттарҙы махсус күнекмәләр ярҙамында тәрбиәләгәндәр. Башҡорт аты талымһыҙ, һыбай йөрөүгә лә, йөк артмаҡлағанда ла, еккән хәлдә лә юғары эш һәләтлегенә эйә. Соҡорсаҡырлы юлдарҙа ла 700-1000 кг йөк һөйрәй ала. Кәүҙәһенең оҙон булыуы арҡаһында йөрөшө тигеҙ, һыбайлыны тиҙ арытмай, шуға күрә оҙаҡ ваҡыт һыбай йөрөгәндә уны башҡа тоҡомло аттарҙан өҫтөн күргәндәр. Күп үрсем биреүе, һөтлө булыуы менән айырылып тора..."

**Халҡыбыҙҙа атҡа бәйле бик күп үткер мәҡәл-әйтемдәр ҙә бар. Саф башҡортса һөйләшкән кешеләр йыш ҡына ҡуллана уларҙы.** Мәҫәлән, бәхәстәге ике кешелә лә ғәйеп булһа, "Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә..." тип әйтәләр. Был донъяның кеме юҡ, йә бер ғаиләлә төрлө холоҡло кешеләр ҙә булыуы мөмкин, тигәнде аңлатыр өсөн "Аттың алаһы ла, ҡолаһы ла була" тиҙәр. Үҙ эшен яҡшы белгән, тырыш кешегә артыҡ күрһәтмәләр кәрәкмәгәнлеген аңлатҡанда, "Салт атҡа сыбыртҡы кәрәкмәй" тигәндәрен ишеткәнем бар. Башҡортса "ҡутара" һөйләшергә яратҡан беҙҙең Баймаҡ яғында әллә ни бай булмаған, әммә үтә йомарт кеше хаҡында һүҙ сыҡҡанда "Арыҡ аттың күтәне киң була", тип тә ебәрәләр...

"Ат" һүҙен халҡыбыҙҙың боронғо бихисап йырҙарында ла осратабыҙ: "Яҡшы атҡа менгән, ҡулына алған уҡ-һаҙаҡ та тигән ҡоралын. Аямаған йәнен, түккән ҡанын - һис бирмәгән башҡорт Уралын..." "Буранбайҙың аты, ай, кирме ине, серге аҫҡайҙары ла тирме ине. Буранбай ҙа менән, ай, Ибраһим Себерҙәргә китер ҙә ирме ине?..." "Егет тә генә кеше, ай, шул булыр: менеп тә йөрөр аттың һәйбәтен. Егет тә генә кеше, ай шул булыр: һөйләп йөрөмәҫ кеше ғәйбәтен..." "Урал урмандары шау-шыу итә ҡиблаларҙан елдәр иҫкәндә. Кешнәшә даръя йылҡы малдар йәмле йәйләүҙәргә күскәндә..." Һуңғы йылдарҙа һәр ауылдың тиерлек тирә-яғындағы тау-ҡырҙарын ҡаплап үлән утлап йөрөгән йылҡы өйөрҙәрен күрһәм, ана шул йырҙар иҫемә төшөп, күңел тулып китә. Фәлән танышымдың иллеләгән, икенсеһенең йөҙләгән һәм унан да күберәк баш йылҡы малы барлығы хаҡында ишетеп, һөйөнәм. Ата-бабаларыбыҙҙың боронғо ғөрөф-ғәҙәтен, ауыл тормошон ошоғаса дауам итеүсе башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары булыуы милләтебеҙҙең бөтөн көйө һаҡланып килеүендә төп ролдәрҙең береһен уйнайҙыр, тигән инаныуҙамын әле үҙем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.



### Абашев ҡәбиләләре

Ошо ҡәүем кешеләре Волганан Уралға тиклемге арауыҡты биләгән күп һанлы ҡәрҙәш ҡәбиләләр төркөмөн хасил итә. Улар айырым төркөмдәргә бүленеп, башҡа бер ҡәбиләләр менән бергә ҡатнаш халыҡ булып формалаша. Тикшеренеүселәр абашев мәҙәниәте осорон б.э. тиклемге XVII - XIV быуаттар сиктәрендә билдәләй. Башҡортостанда уларға ҡараған 60-тан ашыу ҡурған төркөмдәре һәм торалар булыуы асыҡланды.

Абашев мәҙәниәте кешеләре йылға һәм күл буйҙарын төйәк итеп, дүрт мөйөшлө яртылаш ер өйҙәрҙә йәшәй. Уларҙың өйҙәре ике камералы булып, бүрәнә менән көпләнгән тар коридорҙар менән тоташтырылған була. Өй стеналары һәм каркаслы ҡоролмалар вертикаль ҡуйылған бағаналар менән нығытыла. Ғилми яҡтан яҡшы тикшерелгән ҡомартҡылар иҫәбендә Нөгөш йылғаһы буйындағы I Береговское торағын атап була. Ҡаҙыныу эштәре барышында табылған хайуан һөйәктәре йорт хайуандарын үрсетеүҙә эре мөгөҙлө малдарға өҫтөнлөк бирелеүен дәлилләй. Был ҡәбиләләрҙең мал көтөүҙәрендә һыйыр-үгеҙҙәрҙең нисбәте 61 - 78 процентҡа еткән. Ваҡ мөгөҙлө малдар һаны икенсе урында була (10 - 22%); йылҡы һәм сусҡа күп булмаған.

Абашев мәҙәниәте кешеләре ер эшкәртеү менән дә шөғөлләнгән. Быны ҡаҙыныу эштәре барышында күп һандағы бронза ураҡтарҙың, хатта улар күпләп һаҡланған келәттәрҙең табылыуы раҫлай (Үрге Ҡыҙылда, Абзаҡта).

Көньяҡ Уралда массив ураҡтар етештереү өсөн ҡулланылған бер нисә ҡойоу формалары табыла, ә был ошо әйберҙәрҙең бында ҡойоп яһалыуын билдәләп тора. Аныҡ фәндәр методтары ҡулланылған заманса тикшеренеүҙәр Көньяҡ Уралдың баҡыр һәм бронза металлургияһы үҫешендә абашев ҡәбиләләренең айырым урын биләүен раҫланы. Мәҫәлән, Уралдың көнбайыш һырттарында (Баланбаш, Иҫке Ябалаҡлы, Үрнәк) табылған байтаҡ бронза әйберҙәрҙең Уй йылғаһы буйындағы Ташҡаҙған яткылығының мышаяҡ ҡатышлы баҡыр мәғдәненән яһалыу мөмкинлеген раҫлап була.

Баҡыр әйберҙәрҙең бер өлөшөнөң баҡырлы ҡом ҡулланылып яһалыуы уларҙың Ҡарғалы яткылығы менән бәйләнешле булыуы хаҡындағы фекергә дәлил булып тора. Абашев ҡомартҡыларында бронза бысаҡтар, ҡырғыстар, браслеттар, алҡалар һәм башҡа предметтар сағыштырмаса йыш осрай.

Ҡайһы бер абашев ҡомартҡылары табылдыҡтары ҡәбиләләрҙең ул замандағы Көньяҡ Уралға күсеп килеүе барышын һәм ҡәбилә-ара бәйләнештәр характерын аныҡыраҡ асыҡлау мөмкинлеген бирә. Был йәһәттән Рус Тәңгире ҡурғанында (Күгәрсен районы) табылған 20 кг ауырлығындағы йәшкелт йәшмә һәм унан яһалған 5 уҡ башағы хаҡында әйтеп үтергә кәрәк. Был йәшмә төрө таш ҡоралдар яһау өсөн иң ҡулайлыларҙан иҫәпләнә, ул Орск ҡалаһына яҡын булған билдәле яткылыҡтан алынған була. Тимәк, ул 500 саҡрым ерҙән алып килеңгән. Бәлки, был йәшмә ниндәйҙер ҡәбиләнең бер урындан икенсе урынға күсенгән сағында килтерелгәндер, ә бәлки, уны иң боронғо сауҙагәрҙәр алып килгәндер? Был серҙе хәҙер асып булмай инде, әммә ошо миҫал һәм башҡа шундай факттар тикшеренеүсенең төбәктә йәшәгән халыҡтың тарихи үҫеш кимәлен билдәләгәндә примитив фекер йөрөтөүе арҡаһында хаталаныуы мөмкинлегә хаҡында иҫкәртә.

Абашев мәҙәниәте уға синхрон булған мәҙәниәттәрҙән байтаҡ ҡына этнографик үҙенсәлектәре менән ҡырҡа айырылып тора, улар керамикала асыҡ төҫмөрләнә. Был көршәктәрҙең башлыса ҡыңғырау формаһында булыуында, түҫтәк, табаҡ һәм башҡа һауыт-һабаларҙың формаларында сағылыш таба. Абашев керамикаһының төп өлөшө көршәк ауыҙҙарының ҡабарынҡы йөйлө ырып яһалған горизонталь һыҙыҡтар, уларҙың өҫкө яғының һәм төптәренең зигзаг һәм тулҡын рәүешле һыҙыҡтар менән биҙәлеп, ҡатмарлы орнаментлы булыуы менән айырылып тора.

Абашевсылар үлгәндәрҙе киң дүрт мөйөшлө соҡорҙарҙа, башлыса, баштары менән көнсығышҡа, йәйһә бер аҙ ғына төньяҡҡа йә көньяҡҡа йүнәлтеберәк ерләгән, ҡәбер өҫтөн бейек булмаған тупраҡ өйөмө менән ҡаплаған. Ҡайһы берҙә ҡәбер өҫтө ҡумта формаһында яһалған таш плиталар менән ҡапланған; ҡәбер соҡоронон төбөнә бәләкәй генә бура төшөрөлөү осраҡтары ла була, әммә хәҙер уларҙың ҡалдыҡтары бигүк беленеп тормай. Ҡәберҙәр шулай уҡ ағас ярҡа йәйһә бүрәнәләр менән ябылған. Ҡурған өйөмдәре тирәләй таш плиталар түшәлгән, йәйһә вертикаль ҡуйылған бағаналар менән уратып алынған.

Абашев ҡәбиләләренең килеп сығышы һәм артабанғы яҙмышы әлегә аҙ өйрәнелгән проблема булып ҡала. Әйткәндәй, был бронза быуатындағы барса Көньяҡ Урал ҡәбиләләре төркөмдәренә лә ҡағыла. Эш шунда, ҡаҙылып табылған бронза быуаты ҡомартҡылары һәм археологик мәҙәниәттәренең аныҡ раҫланған даталары асыҡланмаған, уларҙың йәше, ҡағиҙә булараҡ, сағыштырып ҡарау юлы менән билдәләнә, сөнки нигеҙ итеп алынған ҡомартҡыларҙың ҡасан барлыҡҡа килгәнен асыҡлау өсөн кире ҡаҡҡыһыҙ критерийҙар юҡ. Был тикшеренеүселәрҙең дөйөм тарихи тәртипкә һалыу мәсьәләләре буйынса ҡараштарының айырылып тороуына килтерә. Мәҫәлән, 50 - 70 йылдар аҙағында Көньяҡ Уралда абашев мәҙәниәтенең йәшәү ваҡыты б.э. тиклем XVI - XIII быуаттар арауығы менән билдәләнеүе хаҡындағы ҡараш таралған була (К. В. Сальников). Һуңғы ике тиҫтә йылда был мәсьәлә буйынса тикшеренеүселәрҙең ҡараштары етди үҙгәрештәр кисерҙе. Мәҫәлән, улар ошо мәҙәниәттең боронғораҡ осорға ҡарауы хаҡындағы фекергә килде.

Дөйөм алғанда, ғилми хеҙмәттәрҙең авторҙары абашев мәҙәниәтенең тәүҙә Урта Волга буйында формалашып, һуңынан уға ҡараған кешеләрҙең ниндәйҙер бер өлөшөнөң Уралға күсеп килеүе һөҙөмтәһендә ошо мәҙәниәттең Волга буйы төркөмө менән параллель рәүештә йәшәүе хаҡындағы ҡараш менән килешә. Әммә, әле атап ителгән ҡараштар, дәлилдәрҙең етерлек булмауы сәбәпле, фараз ғына булып ҡала.




*Етенсе һүрәт. Көньяҡ Уралдың бронза эпохаһы ҡомартҡылары материалдары: 1 - һөңгө осо; 2 - балдаҡ; 3 - һырға сулпыһы; 4 - ҡасау.*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Чернигов-Припять операцияһында

Чернигов-Припять операцияһында ла, Днепр өсөн барған һуғыштарҙа ла полкташтар Әмирйән Хәйҙәров һәм Тимербулат Халиковтар батырлыҡ өлгөләре күрһәтеп, дан ҡаҙана. Әмирйән Тәтешле районының Үрге Ҡоҙаш ауылында тыуып үҫкән, гв. өлкән сержанты, 60-сы атлы полкта пулемет взводы командиры ярҙамсыһы була. Тимербулат Халиков (элекке Маҡар, хәҙерге Ишембай районының Кинйәбулат ауылынан), гв. өлкән сержанты, шул уҡ полктың 1-се эскадронының пулемет расчеты командиры була.

112-се Башҡорт дивизияһының исеме 16-сы гвардия дивизияһы, тип үҙгәртелһә лә, шайморатовсыларҙың һүнмәҫ боевой рухы яңы еңеүҙәргә ерлек бирә. Дошмандың 1-се һәм 8-се пехота дивизияларына ҡаршы алыштарҙа уңышлы боевой ғәмәлдәр башҡарып, уларҙы тар-мар итеүгә ҙур өлөш индергәне өсөн СССР-ҙың Оборона Халыҡ Комиссариатының 1943 йылдың 21 сентябрендәге бойороғо менән 16-сы гв. атлы дивизияһы маҡтаулы Чернигов дивизияһы исеменә лайыҡ була. 23 сентябрҙә кавкорпус командованиеһы 16-сы (Башҡорт) гв. кавдивизияһы яугирҙарын беҙҙең данлы хәрби часҡа маҡтаулы Чернигов исеме бирелеү менән ҡотлай, ошо мөһим операцияла атлы дивизиябыҙ ҡаҙанған уңыштарҙы һәм еңеүҙәрҙе башҡа соединениеларға өлгө итеп ҡуя.

24 сентябрҙә 7-се кавкорпус алдында яңы хәрби бурыс ҡуйыла: Мекшуновка, Неданчичи, Мнево, Видельцы ауылдары йүнәлешендә хәрәкәт итеп, Днепр ярҙарына сығырға, унын уң яғына киҫеп сығып, дошман менән яңы алыштарға әҙер булырға бойорола. 16-сы гв. атлы дивизияһы яугирҙары ла, фашист илбаҫарҙары менән алыштарҙа яуланған уңыштары менән ҡанатланып, Днепр йылғаһы буйындағы ауыл һәм ҡалаларҙы азат итергә ашҡына.

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

"Цитадель" операцияһы (Курск дуғаһында) уңышһыҙлыҡҡа осрағас, Германияның юғары командованиеһы бөтөн көнсығыш фронты буйынса оборонаға күсергә мәжбүр була. Дошман шул уҡ ваҡытта оккупация аҫтында ҡалған совет территорияһында, үҙенең тәрән тылында, яңы оборона рубеждарын төҙөү эшенә тотона. Бигерәк тә совет ғәскәрҙәренә ныҡлап ҡаршы тороу маҡсатында һыу рубеждарын файҙаланыу күҙ уңында тотола. 1943 йылдың 11 августында Гитлер "Көнсығыш уры"н төҙөй башлау хаҡында бойороҡ бирә. Немецтарҙың ошо стратегик оборона рубежы Псков һәм Орша ҡалаларынан көнсығыштараҡ Нарва йылғаһы - Сож йылғаһы - Днепрҙың урта ағымы - Молочная йылғаһы һыҙығы буйлап төҙөлөргә тейеш була. Днепр ярҙары буйындағы оборона ҡоролмалары ошо урҙың (валдың) төп өлөшөн тәшкил итә. Был ярайһы уҡ киң һәм тәрән йылғаның, уның бейек, текә көнбайыш ярҙарының етди тәбиғи тоткарлыҡ булыуы ла иҫәпкә алына. Немец-фашист командованиеһы Днепр йылғаһының совет ғәскәрҙәре өсөн үтеп сыға алмаҫлыҡ барьер буласағына нык ышана. Берлиндағы бер кәңәшмәлә Гитлер ошо хаҡта былай тип белдерә: "...Рустарҙың Днепрҙы аша сыға алыуынан алдараҡ Днепр кирегә аға башлар ине..."

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Әле Салауат Щербаков менән даими бәйләнештәбеҙ. Хәҙер Башҡортостан Башлығы грантына Салауат Щербаковтың Шайморатов генералға һәйкәл эшләүе хаҡында фильм төшөрәбеҙ.*



# ФИЛЬМ — тормошом

**Танылған тележурналист, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Башҡортостан телевидениеһының алтын фондына ингән "Йөрәк", "Батыр", "Эльбрус", "Янсыҡ", "Мин үлмәнем, башҡорттар", "Ер ҡеҙрәте", "Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Тыуған илгә оҙайлы юл", "Минең исемем - Салауат", "Һайланған яҙмыш" һ.б. документаль фильмдар авторы Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы БАТТАЛОВА ҡайҙа ғына, кем генә булып эшләмәһен, һәр урында ла башҡарған хеҙмәтенә ярашлы документаль фильм төшөрә. Шуға күрә уның менән әңгәмәбеҙҙе тап шул туралағы һорауҙан башланыҡ.**

**▸ Гәүһәр, һинең һәр эшләгән ерыңдә документаль фильмдар төшөрөүең үҙмаҡсатмы, әллә был яҙмышыңмы?**

- Яҙмышымдыр тип уйлайым. Ғөмүмән, мин тормошомдо телевидениеһыҙ, киноларыҙ күҙ алдына килтерә алмайым. Йылына бер-ике фильм төшөрмәһәм, тормошом төçһөҙләнә башлағандай. Фильм төшөргәндә үҙ яҙмышың менән йәшәй алмайһың, геройыңдың яҙмышы менән йәшәй башлайһың. Уның күҙҙәре менән тормошҡа ҡарайым, уның һымаҡ уйларға тырышам. Шул уҡ Салауат Щербаковты алһаң, күпме асһаң да, асып бөтөрөп булмаҫлыҡ шәхес. Шул уҡ Ноғман Мусинды алайыҡ. Уның менән баҡыйлыҡҡа күсер алдынан һуңғы тапҡыр күрештек. Ноғман ағай минең Назар Нәжми хаҡындағы фильмымды ҡарағас, шылтыратып, үҙе хаҡында фильм төшөрөүемде һораны. Сәй эсергә саҡыра ла, фатирҙарына барып инһәм: "Бына беҙҙең өйгә ҡояш килеп инде", - тиер ине. Һуңғы тапҡыр ҡыҙы Гөлшат апай менән дауаханала ятҡан саҡтарында ике көнгә бер тапҡыр яндарына барып йөрөнөм. Шундай кешеләр менән осраштырған яҙмышыма рәхмәтлемен.

Әле Салауат Щербаков менән даими бәйләнештәбеҙ. Ул мине һеңлекәше кеүек яҡын итте. Хәҙер Башҡортостан Башлығы грантына Салауат Щербаковтың Шайморатов генералға һәйкәл эшләүе хаҡында фильм төшөрәбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, тарих төшөрәбеҙ. Әлегә барлығы 30 сәғәттән ашыу материал төшөрҙөк.

**▸ Кешеләр ни тиклем бөйөк булһа, шул тиклем ябай була. Был нилектән тип уйлайһың?**

- Быны аңлата алмайым. Салауат Щербаков тураһындағы фильмда уның үҙе һымаҡ мәшһүр шәхестәр интервью бирҙе. Зураб Церетелиҙың өйөнә барып ингәйнек, ул ҡоласын киң йәйеп ҡаршыланы. Грузин халҡының милли аштары менән табын әҙерләгән. Әйтерһең дә, беҙ уның менән кисә генә хушлашҡанбыҙ ҙа, бөгөн тағы күрешәбеҙ. Ошоға йәшәп, мин унан да ябайыраҡ кешене күргәнем булманы. Ҡотҡарыусы Христос Храмын аяҡҡа баҫтырыусы Рәсәйҙең халыҡ рәссамы, Владимир Путиндың дуҫы Василий Нестеренко менән дә осрашып, ябайлығына хайран ҡалдым. Мине Мединскийҙың Башҡортостан, беҙҙең шәхестәр тураһында шул тиклем күп белеүе һоҡландырҙы. Салауат Щербаков менән улар Шайморатов генерал тураһында һөйләшеп ултырҙылар. Мединский генерал тураһында беҙгә ҡарағанда күберәк белә булып сыҡты. Ҡырмыҫҡалы районында Шайморатов генералға һәйкәл асҡанда ла Рәсәйҙең мәҙәниәт министры булараҡ сарала ул ҡатнашҡайны бит.

**▸ Бала сағыңа әйләнеп ҡайтайыҡ. Быға тиклем бер әңгәмәлә холҡом малайҙарҙыҡы һымаҡ булды, малайҙар менән һуғыштым, тәҙрәләр ҙә ваттым, директор алдына ла баҫтырҙылар, тигәйнең. Һинең тәүәккәл булыуың шул сифатыңдан киләме, ғөмүмән, ир-аттарса ҡыйыулығың тормошта һиңә ярҙам итәме, әллә киреһенсәме?**

- Ныҡ ҡамасаулай, сөнки көслө характерлыларҙы яратмайҙар. Үҙ алдыма берәр маҡсат алһам, мин шуға өлгәшмәйенсә туҡтай алмайым. Нисек булһа ла, мин шуны эшләргә тейешмен. Ҡайһы берәүҙәр мине белмәгән көйөнә лә үҙенең дошманы итеп тәғәйенләй. Быны ла аңлай алмайым. Бөгөн утыҙға яҡын фильм төшөргәнмен икән, ошо характерым арҡаһында үҙемде күп нәмәгә өлгәшкәнмен тип иҫәпләйем.

**▸ Һинең фильм геройҙарыңдың ниндәй уртаҡ сифаттары бар тип уйлайһың?**

- Рух бөтөнлөгө һәм халҡына тоғролоҡ. Шул уҡ Эльбрус Ниғмәтуллинды ғына алайыҡ. Салауат Юлаев ролен уйнағанда ул халыҡ рухы идеяһына ныҡ бирелгәйне. Фильмда беҙ уға яраҡлы 68-се размерлы милли кейем теккәйнек. Аҙаҡ ул костюмды үҙенә бүләк иттек. Рәсәй һәм донъя буйынса көслө кешеләрҙең турнир-ярыштарында еңгәндән һуң ул башына ҡамсат бүрек, өҫтөнә елән кейеп, бөтә урында үҙенең башҡортлого менән ғорурланып йөрөнө.

Салауат Щербаковтың да, Радий Хәбиров бүләк иткән ҡамсат бүректе башына кейеп, үҙен донъялағы иң бәхетле башҡорт итеп тойғанын күрһәгеҙ ине!



**▸ Һәйкәл төҙөлөшө фильмда нисек сағылыш табасаҡ?**

- Салауат Щербаковтың проекты конкурста еңеп сығыуынан башлап, һәйкәл асылыуға тиклем араүыҡ барыһы ла фильмда күрһәтеләсәк. Башҡортостанда, шулай уҡ Рәсәйҙә лә бындай фильм төшөрөлгәне булманы. Салауат ағай ҡайһы бер башҡорт тарихына бәйле һорауҙары менән минә лә мөрәжәғәт итте, бер нисә урында минең кәңәштәремдә лә файҙаланды.

Ғөмүмән, быға тиклем скульпторҙың эшен ижади эш тип күҙ алдына килтерә торғайным. Баҡтиһән, бик ауыр ҡара эш икән. Ошо эш барышын күҙәтеү бәхете тәтене беҙгә, фильм төшөрөүселәргә. Кис ҡунаҡханаға шахтерҙар һымаҡ баштан-аяҡ саңға батып, бысраҡҡа буялып ҡайтып инәбеҙ. Салауат Александрович һәйкәл һынын әүәләгәндә йөрәккә операция яһаған хирург һымаҡ эшкә тотона. Ул барыһы менән дә бер төрлө, бер кимәлдә һөйләшә. Зураб Церетели менән нисек аралашһа, уҡыусыһы Николай Николаев менән дә шулай мөғәмәлә итә. Уның өсөн барыһы ла тигеҙ, барыһы ла шәхес, уның өсөн насар кешеләр юҡ. Ноғман ағай ҙа: "Яҙмышыма рәхмәтлемен, минә гел генә һәйбәт кешеләрҙе юлыма сығарҙы", - тигәйне. Салауат, Ноғман ағайҙар тыйнаҡлыҡ өлгөләре.

**▸ Һинең журналистика менән әүҙем шөғөлләнгән сағың үткән быуаттың 90-сы йылдарына тура килә. Шул заманға ниндәй баһа бирәһең?**

- Шул тиклем матур осор. Кемгә әле үҙ ғүмерендә Вәлиди эҙҙәре буйлап бөтә донъяны йөрөп сығыу бәхете тейҙе? Үзбәкстан, Төркиә, Австрия, Германия дәүләттәрендә булып, "Тыуған илгә оҙайлы юл" фильмын төшөрөү бәхете. Үҙе иҫән сағында Рәшит ағай Назаров хаҡында фильм төшөрөү бәхете кемгә тейә? Рәшит Назаров тик бер генә урында, ошо фильмдағы таҫмала ғына тере килеш һаҡланып ҡалды. Күпме эҙләнәк тә, башҡа архивтарҙа беҙ уның тере һынын тапманыҡ.

**▸ Мәшһүр шағирыбыҙ Рәшит Назаров хаҡындағы "Йөрәк" фильмыңды күпме ҡараһаң да, тағы ла ҡарағы килә. Сере нимәлә тип уйлайһың?**

- Ул минең генә хеҙмәт емешем түгел, ижади төркөмдән дә күп нәмә тора. 1989 йылда тәүге тапҡыр командировкаға Бөрйәнгә барҙыҡ. Ул ваҡытта Урал Ғатауллин яҡтыртыусы булып эшләй ине. Ул бөгөн Башҡортостан телевидениеһының баш операторы. Ижади дуҫлығыбыҙ әле лә дауам итә, барлыҡ фильмдарҙы уның менән төшөрәбеҙ.

**▸ Сер булмаһа, әлегә күрһәтелеп өлгөрмәгән ниндәй фильмдарың менән киләсәктә беҙҙе ҡыуандырырға уйлайһың?**

- Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың 90 йәшлек юбилейына арналған 50 минутлыҡ фильмға сценарий яҙғанда үҙемә шундай маҡсат ҡуйҙым: башҡаларҙы ғына түгел, үҙ-үҙенде ҡабатламаҫҡа. Ноғман Мусин һымаҡ шәхес хаҡында фильм төшөрөргә тотоноу өсөн, Айҙар Хөсәйенов минең хаҡта яҙғанса, "дерзкая" булырға кәрәктер ул. Уның китаптарын, "Мәңгелек урман"ы менән "Һайлап алған яҙмыш"ын илай-илай уҡыған кешеләр беҙ. Иң һыҙғанып яңы фильмға тотондоҡ. Тыуған яғына ла барҙыҡ. Фильмдың исемен "Һайлап алған яҙмыш" тип атаным. Тормош Ноғман ағайҙы бик күп ваҡыт ауыр һайлауҙар алдына ҡуйған. Мин уның ниндәй юлды нисек һайлауына баҫым яһаным. Мин үҙем дә белмәй инем, уны 4 тапҡыр Салауат Юлаев премияһына тәҡдим итеп, һуңғыһында ла бирмәҫкә булғастар, комиссия ағзаларынан бер ағай торып: "Һеҙгә оят түгелме, Ноғман Мусинға ла Салауат премияһын бирмәгәс, кем уға лайыҡ?" - тип әйткән. Шунан һуң бер премияны Ноғман ағайға һәм икенсе кешегә бүлеп бирәләр. Ноғман ағай, әлбиттә, тәүҙә шатлана, әммә ҡыпсаҡ ырыуы кешеһенең холҡо текә бит инде, премияны алырға бармай. Премияны ул ваҡытта мәҙәниәт министры булып эшләгән Тәлгәт Сәғитов Ишембайҙа ниндәйҙер бер тантанала Ноғман Мусиндың сәхнәгә сыҡҡан ваҡытын файҙаланып тапшыра. Ноғман ағай менән күпме аралашһам да, уның ауыҙынан зарланыу һүҙен ишеткәнем булманы. Ноғман ағайҙың ныҡлығы имәндәрҙән, мәңгелек урмандан килә торғандыр инде.

**▸ Ноғман ағайҙы ҡапыл юғалтыу шул тиклем ауыр булды...**

- Мин уның менән бөтә кешеләр менән бергә хушлашҡым килмәне. Кеше йыйылырҙан алда барып бәхилләштем. Унда һөйләүселәрҙең һүҙен тыңларға, ерләргә барырға ла көсөм етмәне. Бигерәк үкенесле булды. Шап-шаҡтай йөрөгән еренән имән кеүек ауҙы ла ҡуйҙы. Бөгөлмәне, шартлап һынды. Ноғман ағай тураһында фильмым башҡаларынан бөтөнләй айырылып тора. Сөнки уның тураһындағы фильмды эшләргә ҡурҡтым. Нәфис һүҙ батшаһы тураһында нисек итеп фильм төшөрәһең инде. Фильмды ҡарағас, Ноғман ағай бер генә етешһеҙ яғын да әйтмәне. Тексын уҡығанда ла бер генә һүҙен дә үҙгәртмәне. "Һине төҙәтеп ултырмайым инде, Гәүһәрем минең", тигән булды.

**▸ Тағы ла ниндәйерәк ижади пландарың бар?**

- Берәр тема йә кеше менән ҡыҙыҡһына башлаһам, ауырлы ҡатын һымаҡмын. Салауат Щербаков тураһында мәғлүмәт уҡығандан һуң шулай килеп сыҡты. Уның тураһында мәғлүмәт уҡығас, фильмға тотоноромдо аңланым. Ул Рәсәйҙә генә түгел, донъяла билдәле скульпторҙарҙың береһе. Уның Мәскәүҙә генә 40 һәй-

✓ ***Мин Ырымбурҙағы Каруанһарай тураһында фильм төшөрөү уйы менән янып йәшәйем. Башҡорт халҡының ошо ҡомартҡыһы тураһында бер генә фильм да юҡ. Тағы ла башҡорт тоҡомло аттар тураһында фильм төшөрөлмәгән.***



кәле ҡуйылған, шуларҙың өсөһө Ҡыҙыл Майҙан янында. Мәскәүгә әлеге лә баяғы операторҙар Урал Ғатауллин, Илгиз Насипов менән командировкаға барып, бер аҙна буйына фильмға кадрҙар төшөрҙөк. Уның иҫ китмәле ябай, белемле, эшсәнлегенә хайран ҡалдыҡ. Ул үҙен "йәш башҡорт" тип атай. Уның үҙ тарихы, тамырҙары менән ҡыҙыҡһына башлауы ғәжәйеп. Ул хәҙер тормошондағы бөтә нәмәне башҡорт кешеһе позицияһынан сығып баһалай. Мәскәү буйлап машинала китеп барабыҙ, Салауат ағай руль артында, камералар эшләй. Мин унан: "Салауат ағай, нишләп шәп бараһығыҙ, тиҙлек яратаһығыҙмы?" - тип һорайым. Ә ул: "Ниндәй башҡорт тиҙлек яратмай һуң?" - тип һорауыма һорау менән яуаплай. Ул эсендәгеһе тышында булған бик ҡыҙыҡлы кеше. Минең ҡарамаҡҡа Рәсәйҙә ике бөйөк скульптор бар. Береһе - Зураб Церетели, икенсеһе - Салауат Щербаков. Уларҙың үҙ-ара аралашыуына хайран ҡалдым.

# ТӨШӨРМӘҺӘМ...

## төҫһөҙләнә башлай



Кеше ни тиклем бөйөк булһа, шул тиклем ябай икән. Интервью бирергә күп билдәле шәхестәр ризалашты - Владимир Мединский, Рәшит Нурғәлиев, Василий Нестеренко һәм башҡалар. Улар Щербаков тураһында шул тиклем матур һүҙҙәр әйтте. Былар барыһы ла, тағы ла Салауат ағайҙың нисек итеп башҡортса һөйләшә башлауы ла фильмда бар. "Минең исемем Салауат", "Мин башҡорт халҡының улымын" тигән һүҙҙәрҙе ул үҙе әйтә.

Әле булһын "Урал батыр" хаҡында фильм төшөрөү идеяһы менән йәшәйем. Миңә ҡалһа, һәр башҡорт Урал батыр идеяһы менән йәшәргә тейештер тип уйлайым. Әле "Ашҡаҙар" радиоһында етәксе булып эшләйем бит инде. Радиола яңы миҙгелде "Урал батыр" эпосын уҡыуҙан башланыҡ. Ике ай буйына "Ашҡаҙар" радиоһын ошо эпосты уҡыу менән асабыҙ. Эпосты Шайморатовты сәхнәлә уйнаған мәшһүр актерыбыҙ Хөрмәтулла Үтәшев уҡый. Был тәҡдимде Үтәшевҡа шылтыратып әйткәйнем, ул байтаҡ ваҡыт тын ҡалды ла: "Ҡайһылай ҙа ҙур яуаплылыҡ, булдыра алырмынмы икән?", - тине. Һәр бер һүҙен оло диҡҡәт менән энә күҙәүенән үткәреп уҡыны Хөрмәт Ғаззали улы эпосты. Барлығы 60 өлөштән торған тапшырыу килеп сыҡты. Әле "Урал батыр"ҙан һуң "Аҡбуҙат" эпосын да эфирға бирергә ҡарар иттек.

Башҡа райондан сыҡҡан шәхестәр тураһында күп кенә фильмдар төшөрһәм дә, үҙемдең тыуған яғымдың арҙаҡлы кешеләре тураһында фильмдарым юҡ икән, шуға күрә "Беҙ Мәсетлеләр" тигән фильмдар циклы эшләү ниәтем дә бар. Әйтәйек, Сабир Ваһапов, Барый Кәлимуллин, Ҡотдос Латыпов, Нәжибә Мәҡсүтова, Рәшит Әхтәров һ.б. тураһында.

**Был донъяла бер нәмә лә осраҡлы булмай тиҙәр. Һин үҙеңдең тормош тәжрибәңдән сығып, ошо хәлгә ниндәй аңлатма бирә алаһың. Әйтәйек, башта әйткәнебеҙсә, һәр урында ла фильм төшөрәһең...**

- Эйе, кеше тормошонда бер нәмә лә осраҡлы түгелдер. Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин тураһында фильм эшләнек бит инде. Күп тә үтмәҫтән, Салауат Юлаевтың юбилейына фильм төшөрөү мәсьәләһе килеп тыуҙы. Бер кем дә баҙнат итмәгәс: "Мин эшләмәһәм, кем эшләр?" - тинем дә, тотондом. Бер аҙна эсендә төшөрҙөк фильмды һәм унда Салауат батырыбыҙҙың ролен Эльбрус уйнаны. Салауат Щербаков тураһында фильм эшләгәйнек, уның артынса геройым Шайморатов генералға һәйкәл эшләү конкурсында ҡатнашып еңеп сыҡты. Әле грант буйынса фильм төшөргәндә теге фильмдың кадрҙарын файҙаланасаҡбыҙ. Был донъяла бөтә ваҡиғалар ҙа бер-береһенә бәйләнеп килә. Шулай уҡ Хөрмәтулла Үтәшев академтеатрҙа Шайморатов генералдың ролен уйнаған һәм спектаклдән өҙөктәр фильм өсөн кәрәк булды. Әле эшләгән фильмға Мединскийҙың Шайморатов генерал, Салауат Щербаков хаҡында һөйләгән телмәренең быҒаса файҙаланмаған өлөштәре инеп китәсәк.

Тағы бер нәмәне әйтеп киткем килә: Салауат Щербаков бөтә донъяға билдәле скульптор булһа ла, уның тураһында фильм төшөрөүсе булмаған. Ә Ноғман ағай тураһында алты фильм төшөрөлөп, етенсеһен мин төшөрҙөм. Йәғни Салауат Щербаков тураһында тәүге һәм Ноғман Мусин тураһында һуңғы фильмды төшөрөү миңә яҙҙы.

**Документаль фильмдың башҡа төрлө сәнғәт сараларына ҡарағанда өҫтөнлөгө нимәлә тип иҫәпләйһең?**

- Мауыҡтырғыс документаль фильм төшөрөү еңел түгел. Беҙ тәүге документаль фильмдарҙы кинотеатр залында күрһәтеүҙе башлап ебәрҙек. Зәғиф балалар менән һау-сәләмәт балалар араһындағы мөнәсәбәт тураһында "Параллель донъялар" тигән фильмды күрһәтергә булғас, беҙгә зал йыя алмайһығыҙ, тип, "Родина" кинотеатрының 26 урынлыҡ залын тәҡдим иттеләр. Кешеләрҙә ҡыҙыҡһыныу шул тиклем көслө булды, телефондан туҡтауһыҙ шылтыраттылар. Шуға күрә иртәгә премьера тигән көндөң киләсендә залды алмаштырҙыҡ. Назар Нәжми тураһында "Ялҡындан һәм хистән ҡойолған" тигән фильмға килеүселәрҙең яртыһы залда урын булмайынса ҡайтып китте. Документаль фильмды төшөрөү нәфис фильмды төшөрөүгә ҡарағанда ауырыраҡ. Сөнки унда һинең һәр һүҙең йөҙ тапҡыр тикшереү үтергә тейеш. Ә нәфис фильмда фантазияға урын бар. Мин кем тураһында фильм төшөрһәм, аҙаҡтан барыһы ла иң яҡын дуҫтарыма әүерелә.

**Нәфис фильмдар төшөрөү теләгең юҡмы, булһа, ул фильмдар кем һәм нимә тураһында буласаҡ? Ғөмүмән, башҡорт киноһының киләсәген нисегерәк итеп күҙаллайһың?**

- Әле үҙем бер ҡабырғама ятһам, Шайморатов генерал һәйкәлен, икенсе яғыма ятһам,"Ашҡаҙар моңдары"н уйлайым. Ә башҡорт киноһының киләсәге хаҡында һүҙ әйтергә минең хоҡуғым бармы икән? Минең ҡарамаҡҡа, башҡорт киноһы өлкәһендә бөгөн бик ҡыуаныслы күренештәр бара. Айнур Аҫҡаров, Булат Йосопов һымаҡ егеттәр бик шәп фильмдар төшөрәләр. Кинорежиссерҙар "бөртөклө тауар", Азамат Ҡужәхмәтовыбыҙ бар ине, уға быйыл 30 августа 60 йәш тулған булыр ине. Иҫ киткес көслө документаль фильм оҫтаһы булды Азамат. Салауат Хәмиҙуллиныбыҙ ҙур эштәр башҡара.

Мин Ырымбурҙағы Каруанһарай тураһында фильм төшөрөү уйы менән янып йәшәйем. Башҡорт халҡының ошо ҡомартҡыһы тураһында бер генә фильм да юҡ. Тағы ла башҡорт тоҡомло аттар тураһында фильм төшөрөлмәгән. Ошо ике идея миндә йәшәй, ҡайһы бер кадрҙары күҙ алдыма ла килә. Каруанһарай тураһында документаль фильм да, документаль-нәфис фильм да төшөрөргә була. Төрөктәрҙең әле телевизорҙан барған "Гүзәл быуат" телесериалы һымаҡ итеп. Әйтәйек, нисек итеп сауҙагәрҙәр "Ебәк юлы" аша каруанда йөрөйҙәр, мажараларға осрайҙар, төрлө хәлдәргә тарыйҙар. Фильмды ике сюжет һыҙығы буйынса төшөрөп була, Салауат батырыбыҙ тураһындағы "Мин үлмәнем, башҡорттар!" фильмындағы һымаҡ.

**"Ашҡаҙар" радиоһына ла грант алдың бит әле, конкурс иғлан иттегеҙ, ҡасан йомғаҡлау сараһы уҙасаҡ?**

- Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы үҙешмәкәр таланттарҙың 1-се Республика конкурсына 29 октябрҙә йомғаҡ яһаясаҡбыҙ, Аллаһ бирһә. Һайлап алыу турында 120-нән ашыу кеше ҡатнашты. Уларҙың араһынан 27 башҡарыусыны һайлап алдыҡ. Жюри ағзаларына башҡарыусының кем икәнлеген әйтмәйенсә генә тыңлаттыҡ. Бик ҡыҙыҡ булды. Ҡайһы берәүҙәрҙе баһалаусылар бөтөнләй таныманы. Бал ҡуйғандан һуң ғына ҡатнашыусының исемен әйттек. Һөҙөмтәлә бер-ике билдәле генә йырсылар төшөп ҡалды. Конкурста әлегәсә билдәле булмаған өр-яңы тауыштар ҙа асыҡ. "Ашҡаҙар" радиоһындағы тематик көндө беҙ "Рух көнө" тип атағайныҡ, конкурсҡа йомғаҡ яһау концерты "Рух байрамы" буласаҡ.

**Өфөлә үткән "Яҡташлыҡ көсө" форумында яһаған сығышында Салауат Щербаков: "Хәҙерге ваҡытта кешелек ҡотолор өсөн Нух кәмәһе эҙләй. Мин - башҡорт һәм минең өсөн Нух кәмәһе милләтем", - тигәйне. Һинең Салауат Щербаков тураһындағы фильмыңдан һуң был шәхескә республикабыҙҙа иғтибар барлыҡҡа килде һәм уның проекты конкурста еңеп сыҡты. Был бит һинең дә еңеүең, шулай бит?**

- Был барыбыҙҙың да еңеүебеҙ булды. Салауат ағай тәүге тапҡыр фильмда "Мин - башҡорт" тип әйтте. Ул әлеге ваҡытта тамырҙарын юллай. Атаһының һөйләүе буйынса, Башҡортостан уға тылсымлы төйәк булып тойолған. БыҒаса ул бер тапҡыр ҙа Башҡортостанда булмаған, башҡорттар менән аралашмаған. Атаһының Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ районындағы тыуған ауылына бергәләп барырға уйлайбыҙ. "Мине башҡорт донъяһына Айҙар Хөсәйенов менән һин алып индең", ти ул миңә. Уның әле иң ҙур хыялы - "Урал батыр" эпосына монументаль һәйкәл төҙөү. Ул Өфөгә килгән һайын башҡорт тарихы һәм тормошо буйынса яңылыҡ асып ҡайтарам.

**Бөгөн башҡорт донъяһында ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеүселәрҙең нәҫелендә йә муллалар, йә старшиналар, һәр хәлдә, үҙ заманының зыялы, уҡымышлы кешеләр булған. Һин шәжәрәңде өйрәндеңме?**

- Тыуған ауылым Мишәргә нигеҙ һалыусылар араһында ҡартатайымдың атаһы ла бар, ул дин юлында булған. Әсәйем яғынан ҡартатайым да дини ғилем үҙләштергән. Үкенескә, ҡартатайҙарымдың тубығына ултырып, әкиәт тыңлау бәхете тейմәне, икеһе лә һуғышта ятып ҡалған.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы Батталова, Урал Миңнизар улы Ғатауллин, Әлфиә Басир ҡыҙы Арыҫланова илдең күренекле шәхестәре тураһындағы "Минең исемем - Салауат", "Һайланған яҙмыш" документаль фильмдар серияһы өсөн быйыл Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителгән. Уларға уңыш теләйек!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Шулай итеп ул һис ҡайтырға уйламаған ҡоҙаларҙы, сарт-сорт һыҙыра башламаһынмы! Минең асыуым ҡанып ҡалды - шул кәрәк уларға. Сама белһендәр икенселәй.**



* * *

– Фәриҙәмде һөҙәшеп ҡайттылар, - тип бошонғандай итте өләсәйем бер көн, ут күршебеҙ Таҡыя инәй ингәндә, мыштым ғына күҙҙәрен һөртөп. - Кинйәкәйем дә китә инде оя таштап...

Минә ул шул ҡәҙәре йәл булып китә. Олатайым һуғышҡа алынғанда биш бала менән ҡалған өләсәйем ниҙәр генә күрмәгәндер, әммә бишеһен дә аяҡтарына баҫтыра алған. Бына бөгөн иң кеселен оҙатырға йыйына.

- Ярай, өҙгөләнмә лә, бөтөрөнмә лә. Бер һинән генә уҙған хәлме. Хәйерлегә юра. Бәхетле булһын, таҫтарҙы булһын. Барған урынына таш булып һеңһен. - Шәмәргән өләсәйемдең хәләнә кереп маташҡан инәйҙең үҙенең дә тауышы ҡалтыранып, күҙҙәре еүешләнә. - Ҡоҙаһын ҡасанға килештегеҙ?

- Март башына киләләр инде, Алла бирһә. Ете дуға булып. - Өләсәйем бер сама тынһылана төшкән һымаҡ. - Ҡар ихласлап ирей баштамаҫ элек үткәреп ҡуяйыҡ, тиҙәр.

- Тағы бер әйтәм, ҡайғырма ла, бошонма ла, ҡәйенеңгә, күрше хаҡы - Тәңре хаҡы, иҫәнһау саҡта ҡулдан килгәнсе ярҙам итербеҙ. Мәлендә һин минә иң терәшмәй ҡалманың, беҙ ҙә ташламабыҙ. Йән биргәнгә - йүн биргән, нисек тә үткәреп ебәрербеҙ.

- Рәхмәт инде, күрше, йылы һүҙеңә, ихлас теләгеңә. Хәлемә керҙең. - Бөтөнләй тынысланған өләсәйемдең йөҙө яҡтырып китә.

Мин Таҡыя инәйҙең өләсәйемә, ҡәйенеңгә, тип өндәшкәнен тәүләп ишетәм, шуға күрә уның ниндәйерәк туған булыуын әйтә алмайым.

* * *

Апайымдың туйы шау-гөр килеп, аҙна буйына дауам итте. Түбән ос бығаса күрелмәгән тантаналы байрам төҫөн алды ла, геүләп торҙо. Туйҙа ҡатнашҡаны ла, ҡатнашмағаны ла ҡоҙаларға барынса ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп ҡалырға тырышты. Алыҫ ерҙәрҙә яҡын итеп, ялан яҡтарынан, Ирәндек артылып килгән ҡунаҡтар алдында береһе лә һыр бирмәне. Һәй, намыҫсан, ҡунаҡсыл ауылдаштарым!

Беҙҙәкеләр ҡоҙалар килмәҫ элек үк йыйылып, һый менән ҡапҡа төбөндә көтөп торалар ине инде.

*Һай ҡоҙалар, килдегеҙ,*
*Килдегеҙ ҙә үттегеҙ,*
*Һауалағы ҡояш кеүек*
*Күҙемә күрендегеҙ*, - тип ҡаршы алды улар ҡунаҡтарҙы.

Ҡоҙасаларҙың шаянлыраҡтары:

*Арьяҡта ла ҡомалаҡ,*
*Бирьяҡта ла ҡомалаҡ,*
*Беҙгә тигән ҡоҙалар*
*Ҡап-ҡара ла тумалаҡ*, - тип төрттөрөп тә ебәрҙе.

Ныҡлабыраҡ ҡараһаң улар бит дөрөҫ төрттөрә: саналарҙан төшкән ҡоҙаларҙың барыһы ла тиерлек тумалаҡ та, ҡап-ҡара. Мәхмүт еҙнәм тумалаҡлыҡҡа тумалаҡ түгел, әммә ҡаралыҡ буйынса тегеләрҙән һис ҡалышмай.

Өләсәйем тиккә генә борсолмаған икән. Анауы хәтлем гәмдең тамағын туйҙырып, күңелен табыуы ай-һай еңелдән түгел. Мин быны ситтән ҡарап булһа ла күреп торам. Ә һыйлаусы кешегә нисек?

Мейес артында, бына инде икенсе аҙна үкереп ултырған бал мискәһен алып сыҡҡанда, өйҙә мәхшәр ҡуптымы ни! Барыһы бер булып һөрән һалды:

*Һа-ай! Көрәгә килә! Көрәгә!*
*Көрәгәләр тулы бал килә!*
*Көрәгәләр тулы балдар менән*
*Кәртә-ҡураларға мал килә!*

Иң тумалаҡ, иң ҡара бер ҡоҙа хужа балын маҡтап йырланы:

*Тәпәндәге балы бигерәк ҡыҙыу,*
*Ҡушылғанға тауҙың сейәһе.*
*Уйнап ҡына көлөп, ай эсәйек,*
*Ҡыуанып та ҡалһын эйәһе.*

Ә балды кем ҡойған? Өләсәйем ҡойған. Тимәк, ошо маҡтау йыры ла өләсәйемә тәғәйенләнде.

Туйҙың икенсе көнөнә өйөбөҙгә йәш-еленсәк килеп тулды. Улар еҙнәмә ҡарап таҡмаҡ әйтте:

*Еҙнә, атың бейәме?*
*Ялы ергә тейәме?*
*Апайымды алған өсөн*
*Беҙгә аҡса тейәме?*

Еҙнәй кеше килеүселәрҙең береһен дә мәхрүм итмәй, һәр ҡайһыһының усына мул ғына тамыҙып сыҡты. Ҡайҙан ала тиһең? Шулай ҙа шуҡ балдыҙҙар араһында ҡәнәғәт булмағандары ла табылды.

*Мәхмүт еҙнәй самауыры*
*Ике ерҙән артмалы.*
*Мәхмүт еҙнәй таратҡаны*
*Тауыҡтан да артманы*, - тип иңһайлашты улар.

Рәхмәт урынына, һөмһөҙҙәр! Сығырға торған аҡса барҙыр бында...

Шулай ҙа әсәйем:

*Берегеҙ - бөркөт,*
*берегеҙ - сәскә,*
*Ҡушылдығыҙ ғүмергә.*
*Берегеҙ - ебәк, берегеҙ - уҡа,*
*Ишелдегеҙ мәңгегә*, - тип йырлағас, күңелем бер сама күтәрелеп китте. Алмаш-тилмәш апайым менән еҙнәмә ҡарап ҡуйҙым. Ысынлап та быларҙың береһе - бөркөт, икенсеһе - сәскә шул.

Әрһеҙ ҡунаҡтар тамам ялҡытып бөттө тигәндә, тире тунының тиҫкәре яғын әйләндереп кейгән, ҡулына йүкә сыбыртҡы тотҡан, теге мәл, яңы йылда, минең ҡотто алған айыуға оҡшаш берәү килеп инде. Туйтанлап инеүе булды, йырлап та ебәрҙе:

*Ай ҡашында яҡты йондоҙ,*
*Батыр булһаң бат инде.*
*Туй хөрмәте һис тә бөтмәҫ,*
*Ҡайтыр булһаң, ҡайт инде.*

Шулай итеп ул һис ҡайтырға уйламаған ҡоҙаларҙы, сарт-сорт һыҙыра башламаһынмы! Минең асыуым ҡанып ҡалды - шул кәрәк уларға. Сама белһендәр икенселәй. Йүкә сыбыртҡының ялбыр осона ҡағыҙ аҡсалар бәйләп кенә ҡотола алды тегеләр.

*Тәрән генә икән, ай, һыуығыҙ,*
*Текә генә икән ярығыҙ.*
*Һеҙгә лә килеп ҡунаҡ булдыҡ,*
*Инде үҙегеҙ беҙгә барығыҙ.*

Әлеге сүлмәк ише ҡоҙа шулай тип һуҙып ебәргәйне, минең эсемә йылы булып китте. Әһә, былар бит, ҡунаҡ ашы - ҡара ҡаршы, тигәндәй, үҙҙәре лә саҡырырға уйлай түгелме? Мин был тиклеменә өмөтләнмәй ҙә инем әле. Шәп тәһаң былай булғас!

*Әй, ҡоҙалар, ҡоҙалар,*
*Майҙы ашап бөттөгөҙ,*
*Балды эсеп бөттөгөҙ,*
*Инде ҡайтып китегеҙ*, - тип янай-янай сыбыртҡылы батыр сығып китте. Уның кем икәнлеген танымай ҙа ҡалдым, әммә ғорурландым: нисәмә кешене бер үҙе ҡурҡытты бит.

Ошо мәл оло ғына тоҡ йөкмәгән төп ҡоҙағый күренде. Уны таҡмаҡ әйтеп ҡаршы алдылар:

*Һаҡмар һыуында йыуҙыңмы,*
*Тоғоң ап-аҡ, ҡоҙағый?*
*Йыуасаны мул бешергән,*
*Үәт, маладис, ҡоҙағый!*

Ап-аҡ тоҡ эсендә, ысынлап та, йыуаса ине. Йомарт ҡоҙағый уны һәр береһенең ҡулына тоттороп, таратып сыҡты. Артып ҡалғанын тоғо менән өләсәйемә тотторҙо.

- Мә, ҡоҙағый, сәйгә ҡушып эскән һайын беҙҙе иҫкә төшөрөрһөң, - тине. Ошонан һуң күмәге бер булып тағы таҡмаҡ әйтеүгә, ике ҡоҙағый ҡултыҡлашып бейергә төштө. Төп ҡоҙа булараҡ, атайым үҙенә тәғәйен йырҙы башҡарҙы:

*Ҡарлуғастар осто инде,*
*Оялары буш инде.*
*Хушығыҙ һеҙ, ҡоҙаларым,*
*Хуш аяғы ошо инде.*
*Уны башҡалар күтәреп алды:*
*Һандуғастар осто инде,*
*Оялары буш инде.*
*Хушығыҙ инде, ҡунаҡтар,*
*Айырылышыу ошо инде.*

Нисек кенә ялҡытмаһындар, шулай ҙа ошо бер нисә көн эсендә ҡоҙаларға күнегеп кителгән. Айырылышыу һүҙен ишеткәс тә эсем боша башланы: хушлашыу сәғәте еттеләме ни?

Төш ауышҡанда ҡоҙаларҙың аттары егелеп, саналарға тыңҡыслап бесән һалынған ине инде. Бынының бая еҙнәй аҡсаһына тейенгән малайҙар эшләгән булырға тейеш. Ҡайһы арала өлгөргәндәр тиһең.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар йыйналышып-төйнәлешеп сыҡҡанда, ихата эсен атайымдың гармуны менән түбәнге ос Муллайән апа ҡурайының моңо яңғыратты. Уларға күмәк тауышлы таҡмаҡ ҡушылды. Мин шуларҙың береһен иҫләп ҡалдым:

*Арғы оста, бирге оста,*
*Гармунды уйнаталар.*
*Бөгөн кискә Фәриҙәне*
*Кейәүгә оҙаталар.*

Кискә түгел! Бына хәҙер, көн үҙегендә, бөтә ауыл ҡарап торғанда оҙаталар Фәриҙә апайымды. Өләсәйем бер ситтә шым ғына шәмәреп, албырғап тора.




Төп ҡоҙағый уны йыуатып маташа. "Йыуатма, ҡоҙағый! - тип ҡысҡырғым килде. - Үҙеңдең ҡыҙыңды шулай сит-ят ерҙәргә алып китергә ине. Ул сағында белер инең!" Әммә батырсылыҡ итеп ҡысҡыра алманым, халыҡтан ояндым. Хәҙер генә: "Оло кешегә аҡыл өйрәтергә башың йәш әле", - тиерҙәр ине, тип уйлайым.

* * *

Ҡоҙаларҙы ҡайыҙлай-ҡайыҙлай аҡсаларын һалдырып алып ҡалыуға күп ваҡыт та үтмәне, һыйланырға үҙебеҙ киттек. Эйе, эйе, киттек. Өләсәйемдең ҡаршы булыуына ҡарамай, толопҡа урап, атайым санаға мине лә ултыртты. Саҡырған ерҙә бар, ҡыуған ерҙән ҡас, тиҙәр. Раҫ әйтәләр. Саҡырғандар икән, барырға кәрәк. Ә төп ҡоҙағый мине айырым әйтеп саҡырҙы. Туйҙағылар барыһы ла ишетте быны.

Ирәндек ашаһындағы Ҡыҙыл йылғаһы буйында ятҡан Ишҡол ауылына кәм тигәндә илле саҡрым булыр. Еҙнәйем әйтте. Шуның өсөн дә ауылыбыҙҙа ғына түгел тирә-йүндә даны сыҡҡан аттарҙы ектек. Беҙгә Жиган тигәне, Муллайән апаларға - Хулиган ҡушаматлыһы эләкте. Был тик эш өсөн генә яратылған ике атҡа талымһыҙлыҡ, көс, күндәмлек буйынса тиңләшеүсе юҡ. Һәр хәлдә, беҙҙең тирәлә. Бар ауылдың ҡара эшен ошо икәү башҡара тиһәк тә һис арттырыу булмаҫ. Ана шулай хайран хайуандар.

Ошо ғәләмәт дәү кәүҙәле, ғәйрәттәре ташып торған, төҫтәре төрлөсә булһа ла, ҡиәфәттәре, ҡылыҡ-холоҡтары менән игеҙәктәрҙәй оҡшаш аттарҙың затзәүере әлегә мин белмәгән-күрмәгән Ҡытай иле тарафтарынан булыуын, уларҙың ете тау ашаһында ятҡан Башҡорт иленә килеп юлығыуына ауылдаштарымдың туранан-тура ҡағылышы барлығын һуңынан ғына, бик күп йылдар үткәс кенә белә сәкмен. Ә әлегә данлы тоҡом арғымаҡтарын юрттырып ҡына Фәриҙә апайымдың туйына китеп барабыҙ. Кәйеф шәп - алда бит байрам көтә.

Башта был көслө булһалар ҙа ауыр ҡуҙғалған аттар менән ҡалай итеп һебәне алмаҡ кәрәк, тип хафалана биреп ҡуйғайным, бара-тора төшөндөм. Ат кәртәһенә еткәс, Муллайән апа, ҡарт бүре, үҙ ылауының тәртәһенә Осҡон ҡушаматлы саптарҙы бәйләп алды. Тимәк, һебә өсөн ул сабасаҡ. Ошоно аңлап алыуҙан өҫтөмдән ауыр йөк төшкәндәй булды. Осҡон барында ҡурҡмаҫҡа була. Үткән йәйге һабантуйҙағы арғымаҡтар бәйгеһендә нәҡ ул беренсе килде. Шуға күрә хәҙер минең күңелем тыныс.

Ялан яҡтарында инде ҡар епшекләнеп, бутҡа ише иҙелә башлаған. Ошондай мәлдә тимер табанлы саналар һәләк еңел шыуа, аттарға ауырлыҡ төшмәй, лерт-лерт юртып ҡына баралар. Ә Осҡон юртмай, ул йөҙәп кенә килә төҫлө. Уның хәрәкәттәре шундай еңел һәм килешле. Әйтерһең дә, тылсымлы әкиәттәрҙәге тылсымлы зат. Тик улар кеүек һөйләшә генә белмәй. Уға хатта кәртәлә торор урын да, тәрбиә лә айырым. Мисәүләп бәйләнгән Осҡон йөк тартмай, үҙ алдына ғына бара. Бәйге аты йөк тартырға тейеш түгел. Муллайән апа дөрөҫ эшләгән уны төп атҡа йәнәшә бәйләп. Урын-еренә еткәс күрһәтер әле Осҡон кемдең кемлеген. Мин уға күпме генә ҡарап барһам да һоҡланып туя алмайым.

Дарья булып йәйрәгән йылға ярына килеп төртөлдөк. Күгелйемләнеп ятҡан боҙ өҫтөнән шабырлап һыу аға.

- Күрәһең, Ҡыҙыл төбөнә ҡуша туңған, ана, шәреһе аша киткән, - тип ҡуйҙы атайым. Мин ошоғаса ишетә генә белгән Ҡыҙыл йылғаһы менән шулай таныштым. Шаулап ятҡан шәрене йөҙөп тигәндәй аша сыҡтыҡ. Ярай әле аттарыбыҙ дағалы, ул-был хәлгә тарыманыҡ. Саналарға бер аҙ һыу инде инеүен, әммә был ғына ваҡ-төйәк күтәренке кәйефтәрҙе боҙа алманы. Киреһенсә, тәрән һыу эсенән санала караптай йөҙөп барыуы мәҙәк күренде. Кемгә әлегә әле бындайы?

Ҡаршы ярға сығыу менән, тыҡталып, аттарға тын алырға ирек бирҙек. Ни тиһәң дә, илле саҡрым аҙ ара түгел: батырға ла ял кәрәк. Ат йәнле Муллайән апа уларға бөрәр ус һоло ялматты, берәр йотом һыу эсерҙе. Баҙлап килгән хайуандарға, шәт, артығы ярамай.

**(Дауамы. Башы 36-сы һанда.)**

**✓ *Ул үҙенә төрлө быуын вәкилдәрен йыйҙы һәм милли кейемдең кешене йәмғиәт менән бәйләүсе бер сынйыр икәнен тағы ла бер иҫбатланы. Ысынлап та, милли кейем оло әһәмиәткә эйә мәғлүмәти сығанаҡ.***

*АФАРИН!*

**Башҡортостанда өсөнсө йыл уҙғарылып килгән Милли кейемдәр көнө республиканың төп музейында ла киң масштабта үтә. Ағымдағы ошондай байрам Башҡортостан Республикаһының Милли музейына үҙ халҡының тарихына, ғөрөф-ғәҙәтенә, йолаларына һәм милли кейеменә битараф булмағандарҙы йыйҙы. Байрамға килеүсе төрлө милләт вәкилдәренең үҙ милли кейемдәрендә булыуы был көндөң һәр кем өсөн әһәмиәтле булыуын һәм музейҙың "Милли кейемдә булайыҡ" тигән саҡырыуын ҡуш ҡуллап күтәреп алыуын раҫланы.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘ БУЛАЙЫҠ!




Килгән ҡунаҡтарҙы тәбрикләп, музейҙың генераль директоры вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Исхаҡов был байрамдың төрлө быуын вәкилдәре араһындағы бәйләнеште нығытыуға ҙур өлөш индереүен, ә матди һәм рухи мәҙәниәтте һаҡлаусы Милли музейҙа этнографияға, шул иҫәптән милли кейемгә бәйле бай экспонаттар залы һәр саҡ килеүселәр араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыуын билдәләп үтте. Ысынлап та, был көндө лә музейҙың башҡорт һәм башҡа милләттәрҙең туй һәм көндәлек кейемдәренә байҡау яһаған экскурсиялары, милли кейем, төрлө халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре тураһындағы сығыштар сарала ҡатнашыусыларҙы күпләп йәлеп итте.

Өфө ҡалаһында йәшәүсе Нәфисә Солтанова һуңғы ваҡытта милли кейемгә, ғөмүмән, миллилеккә иғтибар республика етәкселәре тарафынан да, халыҡ яғынан да бермә-бер артыуын билдәләне һәм: "Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, бынан 10-20 йылдар элек милли кейемгә йәмәғәтселек яғынан иғтибар булманы, уны ошо өлкәлә эшләгән белгестәр өйрәнде лә, тарихсылар күҙ уңынан ысҡындырманы. Беҙ бындай кейемдәрҙе тик сәхнәләрҙә, музейҙарҙа, әгәр һаҡланып ҡалған булһа, оло йәштәге инәй-апайҙарҙың өйөндә генә күрҙек. Шуға күрә һуңғы ваҡытта милли кейемгә ҡарата булған иғтибарҙың артыуы, һис шикһеҙ, ҡыуаныслы күренеш. Шәхсән үҙем дә был мәсьәләгә иғтибарымды арттырҙым һәм үҙ ҡулдарым менән милли кейем тегә башланым. Минең баш баҫып ошо эшкә бирелеүемде күргән ейән-ейәнсәрҙәремдең дә милли кейемгә иғтибары артты. Бына бөгөн дә байрамда йәштәрҙең күп булыуы шатландыра", - тип үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашты.

Милли кейем теге йәки был халыҡтың үҙ-ара милли оҡшашлығын сағылдырыусы төп күрһәткестәрҙең береһе. Шуға күрә әлеге байрамдың сағыу һәм үҙенсәлекле сара ғына түгел, унның балаларға һәм йәштәргә үҙ милләте тураһында һөйләүсе мәғлүмәти сығанаҡ булыуы тураһында ла оноторға ярамай. Был көндө музейға килеүселәр араһында милли кейемдәге балалар һәм йәштәрҙең күп булыуы уларҙың был байрамға ыңғай ҡарашы һәм үҙ булмышына тоғро ҡалыуы тураһында асыҡ һөйләүсе күрһәткес булып тора ла инде. Бының шулай икәнен Өфөнөң 94-се лицей уҡыусыһы Евгений Валерьевтың: "Бөгөнгө йәштәргә үҙ халҡының тарихы, уға ҡағылышлы мәғлүмәт ҡыҙыҡлы түгел, тиҙәр ҡайһы берәүҙәр. Ләкин беҙҙең барыбыҙҙы ла бер ҡалыпҡа һалырға ярамай. Мәҫәлән, мин үҙебеҙҙең милли кейемде бик яратып кейәм һәм уға арналған байрамдың булыуын бик хуплайым. Был көндө мәктәпкә милли элементтары булған кейемдә килеүҙе, һәр кемдең үҙ милләте тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреүен бик дөрөҫ һәм кәрәкле, тип иҫәпләйем", - тиеүе асыҡ дәлилләй.

Бөгөнгө көндә милли кейем эстетик һоҡланыу өлгөһө генә булыуҙан тыш, көндәлек тормошобоҙға ла әүҙем үтеп инә. Милли мотивтар ҡулланып тегелгән заманса кейемдәрҙең һәм башҡа аксессуарҙарҙың актуаль трендҡа әйләнеүенә барыбыҙ ҙа шаһит. Әйтергә кәрәк, милли кейем һәм милли элементтар менән эшләнгән әйберҙәр ҡатын-ҡыҙҙар араһында ғына түгел, шулай уҡ ир-егеттәр тарафынан да ҙур һорау менән файҙалана. Шулай уҡ милли мотивтар нигеҙендә тегелгән кейемдәр һәм әйберҙәр төрлө тарихи хәл-ваҡиғаларҙы реконструкциялауҙа, квестарҙа киң ҡулланылыш тапты. Ләкин милли кейемгә ҡарата булған ҡыҙыҡһыныуҙы тағы ла арттырыу, киңәйтеү юлдарын эҙләү мөһим, ти философия фәндәре кандидаты Гүзәл Ҡазбулатова. "Глобалләшеү осоронда йәшәйбеҙ һәм барыбыҙға ла бер төрлө ҡиәфәткә инеп китеүҙән нәҡ милли кейем һаҡлай. Бөгөнгө көндә йәштәренең дә, хаҡлы ялдағыларының да, ҡатын-ҡыҙҙарының да, ир-егеттәренең дә өҫтөндә джинсы салбар, футболка һәм башҡа ошондай кейемдәр. Тағы ла төпкәрәк төшөп һәм образлы әйткәндә, Рәсәйҙә лә, Эфиопияла ла халыҡ бер төрлө кейемдә. Теге йәки был халыҡҡа ғына хас үҙенсәлек тә, айырмалыҡ та юҡ. Ә милли кейем нәҡ ошондай миллилекте, үҙенсәлекте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итә. Шул уҡ ваҡытта милли кейем дә бер урында тормай, ул үҫешә, байый, уға һәр замандың да йоғонтоһо ҙур. Йәштәрҙә милли кейемгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуҙың бер юлы - уны цифрлаштырыу, тип уйлайым. Улар хәҙер барыһы ла интернетта, шуға күрә мәғлүмәт тә күбеһенсә нәҡ унның аша бирелергә тейештер. Мәҫәлән, бөгөн музейҙа матур итеп ойошторолған оҫталыҡ дәрестәре лә цифрлаштырылып, төрлө интернет майҙансыҡтарҙа урын алһа, яҡшы булыр ине", - тип үҙ фекерен белдерҙе ул.

Был көндә музейға килеүселәр "Селтәр" студияһы ағзаларынан "Һарауыс" сигеүен өйрәнде, шулай уҡ төрлө милләт оҫталары ҡунаҡтарҙы сыуаш сигеүе, урыҫ биҙәктәре менән таныштырҙы. Теләге булған һәр кем башҡорт халыҡ музыка ҡоралы ҡурайҙа уйнарға өйрәнде. Байрамда виртуоз ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың сығыш яһауы һәм унның оҫталыҡ дәресе барыһының да күңеленә хуш килде. Ә "Этно стиль рәүешендә бейе" флешмобы башҡорт, татар, чечен халыҡ бейеүҙәрен бар матурлығында сағылдырып, сараның күркәм бер өлөшөнә әйләнде.

Милли кейемдәрҙәге дефиле хаҡында айырым әйтеп үтергә кәрәктер, сөнки ул үҙенә төрлө быуын вәкилдәрен йыйҙы һәм милли кейемдең матур булыуынан тыш, кешене йәмғиәт менән бәйләүсе бер сынйыр икәнен тағы ла бер иҫбатланы. Ысынлап та, милли кейем оло әһәмиәткә эйә мәғлүмәти сығанаҡ, ул үҙендә тотошлайы менән һәм һәр бер айырым элементында теге йәки был халыҡтың йәшәү рәүешен, ғаилә хәлен һәм социаль статусын, хатта ниндәй эштәр башҡарғанын сағылдыра. Хатта бер милләт араһында ла, унның төрлө төбәктә йәшәүселәренең милли кейеме форма байлығы, биҙәүестәренең үҙенсәлеге, уларҙы тегеү һәм эшләү алымдарының айырылып тороуы менән ҡиммәтле. Һәм республиканың төп музейында үткән "Милли кейемдә булайыҡ" байрамы сиктәрендә уҙған милли кейемдәге дефиле ошоно асыҡ күрһәтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡа байрам даталарынан айырмалы рәүештә, Милли кейемдәр көнө республикала күптән түгел билдәләнә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул күптәрҙең көтөп алған һәм ихлас ҡатнашҡан байрамдарының береһенә әйләнә бара. Йылдан-йыл милли кейемдәр көнөндә ҡатнашыусыларҙың арта барыуын иҫәпкә алғанда, әлеге байрам датаһының урынлы һәм үҙ ваҡытында булдырылыуын билдәләп үтергә кәрәк. Йылына ике тапҡыр мәктәпкә лә, эш урынына ла милли кейемдә йәки милли элементы булған әйберҙә килергә әйҙүкләп тороусы байрам, уға арналған саралар булғанда кешеләр үҙенең тарихын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеүгә дәрт уяна, миллилеккә табан тағы ла бер аҙым эшләнә.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

*АҠҺАҠАЛ ҺҮҘЕ*



# АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ БЫЛАР

**Сурытмай ғына әйткәндә...**

• Бөгөн һанда тәкмәс атып бейеү, тиҙәр,
Әтәс кеүек күк-йәшелле көйләү, тиҙәр.
Оҡшай икән, теләгәнсә ҡыланһындар,
Беҙгә яҡын дәртле бейеү, моңло көйҙәр.

• Мөхәббәттең йөҙөн өттө фәхишәләр,
Хыял, наҙҙың хаҡы төштө - кеше шәрә!
Тойғоларҙы сүп-септәгә әйләндереп,
Саф хистәрҙән ҡороҡ өсөн еп ишәләр.

• Ҡайһы берәү ҡарунлыҡта аңын йотҡан,
Ярлы заман баҙарында барыһын "отҡан".
Нәфсеһенән сама белмәй, бүре кеүек,
Туң мәкегә ҡойроҡ һалып, балыҡ тотҡан.

• Донъяларҙа ахмаҡлыҡ күп, йүнләп баҡһаң;
Көндән бер көн кәкүк яңы ысул тапҡан,
Ояһыҙ ҙа себеш баҫып сығарам тип,
Йомортҡаһын елкәһенә һалып ятҡан.

• Бер көн ҡуян айыу булып ҡыланған, ти,
Балдай күреп, сайыр ашап, һыйланған, ти.
Белер, белмәҫ көйө ятҡа тиңләшәм тип,
Эсе китеп, сәсәп, с...сып илаған, ти.

• Булмаҫ инде был донъянан артта ҡалып,
Тигән дә, ти, ат йөрөгән маймылланып.
Бот араһы асылырын уйламай ҙа,
Һеперткеләй ҡойроҡ осон һыртҡа һалып.

• Бер көн тауыҡ йөрөгән, ти, салт төкөрөп,
Әтәс булып, кәпәс кейеп, шат кикереп.
Ҡайҙан ғына белһен инде, сөрәкә баш,
Әтәс итә кәпәс түгел, ә кикрек.

• Ҡырмыҫҡалар донъя ҡора кемуҙарҙан,
Ҡурҡмай улар үлем барҙан, ҡазаларҙан,
Әҙәм уйлап табып тора яңы ҡорал,
Ватып, ҡырып бөтөр өсөн донъяларын.

• Белгәндәрҙе өйрәтәм тип һүҙ әйтмәгеҙ,
Күргәндәргә төҫ күрһәтеп йөҙәтмәгеҙ,
Минең кеүек, көн дә Айҙың Ерҙе урап
Әйләнгәнен тәҙрә аша күҙәтһәгеҙ...

**Урал МОСТАФИН.**
**(Аҙағы).**

✓ *Уҡымышлылығы, белемле булыуынан сығып, халыҡ уны хөрмәтләп Кинйә абыҙ тип йөрөтә. 1770 йылдарҙа ул атай йортонан сығып, үҙ ырыуы ерҙәрендә, бөгөнгө Көйөргәҙе районында урынлашҡан яңы ауылға нигеҙ һала.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҮПКӘЛӘҮ ЙӨРӘКТЕ АУЫРЫТА

■ Үпкәләү оҙаҡ ваҡыт дауам итһә, йөрәккә насар тәьҫир итеүен беләһегеҙҙер. Насар тойғоларҙы, ваҡиғаларҙы үткәреп ебәрә белмәү ҡан баҫымын күтәрә, был иһә гипертония менән инсультҡа килтерә. Иҫке эмоциональ яраларҙың кеше сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын тикшергәндән һуң, Сан-Диеголағы Калифорния университеты белгестәре ошондай фекергә килгән. Тәжрибәлә ҡатнашыусы 200 кешене махсус приборҙар менән тикшереп ҡарағандан һуң, кем үҙен ҡасандыр бушҡа рәнйетеүҙәрен онота алмай, уларҙың ҡан баҫымы йыш үҙгәреп тороуы һәм йөрәге йышыраҡ тибеүе асыҡланған. Ғалимдар фекеренсә, ҡайһы берҙә ҡан баҫымы үҙгәреүе ҡурҡыныс түгел, әммә был хәл даими дауам итһә, йөрәк ауырыуҙары хәүефе бермә-бер арта.

■ АҠШ-тың Аризона университеты хеҙмәткәрҙәре депрессия менән көрәшеүҙең ҡыҙыҡлы ысулын тәҡдим итә. Улар пациентты башын тышта ҡалдырып, йылытыу элементтары менән йыһазландырылған ҡыҙыу палаткала 2 сәғәт тотоп дауалап ҡарай. 38 градус йылылыҡтағы палаткала тәндә кәйефте яҡшыртыу өсөн яуаплы химик матдәләр бүленеүе яҡшыра икән. Был бета-эндорфиндар ауыртыуҙы баҫа, шулай уҡ кешегә ыңғай эмоциональ тойғолар кисерергә булышлыҡ итә. Был ысулды ҡулланып ҡарауға пациенттарҙың мунсанан һуң физик ҡына түгел, ә психологик йәһәттән дә хәлдәре яҡшырыуы этәргес биргән.

■ Көнөнә - ике алма: был һәр ҡатын-ҡыҙ рационының мөһим өлөшө. Бигерәк тә гүзәл зат 50 йәште үткән булһа был мөһим, сөнки алма инсульт һәм инфаркт хәүефен 25 процентҡа түбәнәйтергә мөмкинлек бирә. Бындай һығымтаға Флорида университеты ғалимдары килгән. Улар үткәргән һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленгән. Беренсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә ике алмаға тиң булған 75 грамм киптерелгән алма ашарға тейеш булған. Икенсе төркөм ошо уҡ күләмдә слива ашаған. Өс ай һайын уларҙың һәр береһе ҡан анализы тапшырған. Ул күрһәтеүенсә, кем алма ашаған, уның ҡанында "насар" холестерин күләме тәүҙә 16, һуңынан 8 процентҡа түбәнәйгән. Сливалар бындай һөҙөмтә бирә алмаған. Шуға ла тап алма йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеүсе булып һанала.

■ Ғалимдар физик көсөргәнештең психикаға ыңғай тәьҫир итеүен күптән дәлилләгән. Табиптар әйтеүенсә, физик күнекмәләр организмда митохондрийҙарҙың күләмен арттыра. Митохондрийҙар энергия бүленеп сығыу өсөн яуаплы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнгәндән һуң көс һәм ихтыяр көсө арта. Көньяҡ Каролина университеты ғалимдары фаразлауынса, был матдәләр баш мейеһендә лә әүҙемләшә. Һөҙөмтәлә, хәтер яҡшыра, депрессия, күңел төшөнкөлөгө юҡҡа сыға.

■ Артыҡ күп йоҡларға ярамай, сөнки оҙаҡ йоҡлау һөҙөмтәһендә ҡандағы шәкәр күләме арта. Артыҡ ауырлыҡтан яфаланыусы балаларҙы тикшергәндән һуң, ғалимдар ошондай фекергә килгән. Шулай уҡ аҙ йоҡлау ҙа организм өсөн зарарлы, был осраҡта инсулин секрецияһы ҡыҫҡарған. Филадельфияның балалар дауаханаһы эндокринологы Дорит Корен әйтеүенсә, глюкоза күрһәтестәре үҙгәреп тормаһын өсөн төндә 7,5-8,5 сәғәт йоҡларға кәрәк.

ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# КИНЙӘ АРЫҪЛАНОВ,

## йәки Батырҙың тыуған ауылына нисә йыл?

**Юрматы, тамъян, ҡыпсаҡ ырыуҙары йәшәгән Мәләүез районы биләмәһендә тарихи ваҡиғалар шаһиты, арҙаҡлы шәхестәр төйәге булған тораҡ пункттар байтаҡ. Арыҫлан - шундай ауылдарҙың береһе.**



*Көйөргәҙе районындағы һәйкәл янында.*

Уның барлыҡҡа килеү ваҡытын асыҡлау маҡсатында яҙылған хатҡа Башҡортостан Республикаһы Милли архивынан килгән яуапта түбәндәгеләр яҙылған: "Деревня Арсланово - одно из коренных поселений Бушман-Кипчакской волости. Носит имя Арслана Аккулова, отца сподвижника Пугачева - Кинзи Арсланова (А.З. Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. Уфа. 2009 г. стр. 67). На карте Уфимской провинции с 1755 года показана деревня Арсланово. В 1722 году Арслан Аккулов от имени башкир Ногайской дороги написал прощение о наказании прибыльщиков Андрея Жихарева и Михаила Дохова, вводивших 72 новых налог и прибывшего в Башкирию комиссара Александра Сергеева за злоупотребления и насилия над местным населением (Материалы по истории БАССР, том 1, часть 1, Ленинград, 1936 год, стр. 109-121). Вышеизложенные факты дают основание предполагать, что д. Арсланово существовала и до 1722 года".

Күреүебеҙсә, үрҙә әйтелгән сығанаҡ Арыҫлан ауылының 1722 йылға тиклем барлыҡҡа килеүен дәлилләй. Ауылдың тәүге атамаһы икенсе булыуы ла ихтимал, әммә уның Арыҫлан батырҙың төйәге икәненә шик юҡ. Бындай осраҡтарҙа аныҡ йылдарҙы билдәләү урындағы йәмәғәтселек, власть органдарына ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, Мәләүез ҡалаһына нигеҙ һалынған ваҡыт та, 1960 йылдарҙа сағыштырмаса табылған мәғлүмәттәрҙән сығып, 1766 йыл тип нарыҡланды. Шуға күрә, ниңә ошо арала Арыҫлан ауылына 300 йыл тигән ваҡыт иҫәбен асмаҫҡа?

Мәғлүм булыуынса, Арыҫлан Аҡҡолов, белемле, урыҫ телен яҡшы белгән шәхес булараҡ, халҡыбыҙҙың хоҡуҡтарын, азатлығын яҡлап, Санкт-Петербургҡа Сенатҡа тиклем барып еткән һәм суд аша юғарыла әйтелгән чиновниктарҙы яуапҡа тарттырыуға өлгәшкән. Тархан Арыҫлан Аҡҡолов башҡорттар тарихында әһәмиәтле урын биләгән, ижтимағи-сәйәси өлкәлә алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы, бай кеше булған. Старшина булараҡ, үҙенең олоҫонда, өйәҙендә генә түгел, ырыуҙаштарын, милләттәштәрен ҡурсалап, хәстәрлек күреп, бар халыҡ араһында ҙур ихтирам яулаған. Уның тамырҙары 16 быуын аша Бошман-Ҡыпсаҡ ырыуын нигеҙләгән Бошман бейгә барып тоташа. Арыҫлановтарҙың шәжәрәһе 1960 йылда нәшер ителгән "Башкирские шежере" китабында бирелгән. Арыҫлан Аҡҡоловтың Кинйәнән башҡа тағы Юлбарыҫ, Ирназар исемле улдары булған.

Арыҫлан ауылы Кинйәнең тыуып үҫкән ере булараҡ ҙур тарихи әһәмиәткә эйә. Ул, халыҡ хәтерләүҙәренән билдәле булыуынса, сама менән 1732 йылда Арыҫлан Аҡҡоловтың Нөгөш йылғаһы буйындағы Баг-ра тауы итәгендәге йәйләүендә донъяға килгән. Кинйә бала сағынан уҡ зирәк, аҡыллы, уҡырға әүәҫ, ғәҙел, ҡыйыу һәм тәүәккәл булып үҫә. 1735-1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе булараҡ тарихта урын алған юрматы ырыуы уҡымышлыһы Килмәк абыҙ Нөрөшев мәҙрәсәһендә белем һәм тәрбиә ала.

Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлау хеҙмәтендә, батша армияһының хәрби походтарында ҡатнаша. Уҡымышлылығы, белемле булыуынан сығып, халыҡ уны хөрмәтләп Кинйә абыҙ тип йөрөтә. 1770 йылдарҙа ул атай йортонан сығып, үҙ ырыуы ерҙәрендә, бөгөнгө Көйөргәҙе районында урынлашҡан яңы ауылға нигеҙ һала. Кинйәнең Һеләүһен, Ҡужәхмәт, Рәхмәтулла һәм Сәғит исемле улдары булған. Һеләүһенден Абдрахман исемле улының 5 улы, Кинйә менән бер туғандарҙың - Юлбарыҫтың 5 улы, Ирназарҙың улы Ҡотлоғәлләмдең 9 улы - барыһы ла Кинйә ауылында йәшәгән (юҡҡа ғына ҙур булмаған бер Кинйәбыҙ ауылынан өс Советтар Союзы Геройы сыҡмағандыр).

Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанға тиклем Кинйә Арыҫланов Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫонон старшинаһы була. Ул 210 йорттан, 1600-1700 кешенән торған үҙ олоҫонон ғына түгел, ғөмүмән, башҡорт халҡының хоҡуҡтарын яҡлау эшендә ғәйәт ҙур тырышлыҡ һәм фиҙаҡәрлек күрһәтә. Был хаҡта Ырымбур дәүләт архивында һаҡланған документтар һөйләй. Бер һүҙ менән әйткәндә, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына тиклемге осорҙа Кинйә Арыҫланов ир уртаһы йәшенә еткән, ғилемгә эйә, ҙур тәжрибә туплаған аҡһаҡал, ил ағаһы дәрәжәһенә күтәрелгән шәхес була. Ул батша түрәләренең, карателдәренең, урыҫ заводсыларының халыҡты иҙеүенә һүҙ менән генә ҡаршы тороп булмаҫлығын яҡшы аңлай, ваҡиғаларҙың ихтилалға барып етеүен күҙаллай.

Крәҫтиәндәр һуғышын күтәргән Емельян Пугачевҡа Кинйә Арыҫланов 500 кешелек отряд менән 1773 йылдың 9 октябрендә ҡушыла. Уға Пугачев баш полковник чинын бирә һәм башҡорттарға мишәр, сыуаш, мари, ҡалмыҡтар ҡушылған ғәскәрҙәр менән командалыҡ итеүҙе йөкмәтә. Кинйәнең был йүнәлештә башҡарған саралярын бер-ике һүҙ менән генә аңлатып булмай. Ырымбурҙы ҡамауҙа тотҡанда башҡорт һыбайлылары биш меңгә барып еткән. Был иһә - Пугачев армияһының яртыһын тиерлек тәшкил иткән тигән һүҙ.

Пугачев полковниктарының 114-е - урыҫ, 70-тән ашыуырағы башҡорттар булыуы тураһында мәғлүмәт бар. Кинйә - Крәҫтиәндәр һуғышының идеологы, ул Пугачевтың иң ышанысла көрәштәшенә әйләнә. Уның менән бергә полковник чины алған улы Һеләүһен Кинзин, туғандары Ҡотлогилде Абдрахманов һәм башҡалар хеҙмәт иткән. Кинйә Арыҫлановтың 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышындағы ролен күренекле ғалим-академик Ғайса Хөсәйенов "Кинйә абыҙ" исемле яҙмаһында ("Ил азаматтары", Өфө, 1998 йыл, 309-330-сы биттәр) ентекле сағылдырған. Бында "Әгәр Пугачев Кинйә Арыҫлановтың кәңәштәрен ҡабул итмәһә, Крәҫтиәндәр һуғышы шул Ырымбур төбәгендә, бер нисә яу менән генә сикләнеп, һүнеп ҡалыр ине, моғайын", - тип әйтелә.

Кинйә Арыҫлановтың Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышына ҡушылыуының төп маҡсаты - халыҡтың милли азатлығын, ер-һыуын, ғөрөф-ғәҙәтен, динен һаҡлап ҡалыу. Колониаль иҙеүҙән түҙемлегенең сигенә еткән башҡорт халҡы көрәшкә дәррәү күтәрелә. Был XVIII быуаттағы башҡорттарҙың иң ҙур һәм көсөргәнешле ихтилалына әйләнә.

Батша илбаҫарҙарына ҡаршы халҡыбыҙҙың аяуһыҙ көрәшен милли рухты, хәрби батырлыҡты кәүҙәләндергән, данын донъя кимәленә күтәргән Салауат Юлаев һәм башҡа арҙаҡлы шәхестәребеҙ етәкләй, тарихыбыҙҙың иң сағыу биттәре яҙыла. Кинйә Арыҫланов Пугачевҡа, ихтилал идеяларына үҙенең һуңғы көндәренә тиклем тоғро ҡала. 1774 йылдың 24 авгусында Түбәнге Волга буйы Царицын менән Ҡара Яр ҡәлғәләре араһында пугачевсылар ғәскәре яҡшы ҡоралланған күп һанлы Михельсон армияһы тарафынан тулыһынса тар-мар ителә. Уларҙың бер-ике йөҙләп кенә

кешеһе ҡалған отряды Волганың икенсе ярына сығып ҡотола. Ошо буталсыҡ мәлдә үҙҙәрен һаҡлап ҡалыу ниәтендә бер нисә һатлыҡ йән атаман, эргәләрендә Кинйә Арыҫлановтың да булмауынан файҙаланып, ҡола яланда Пугачевты тотоп, аяҡ-ҡулын бәйләп, хөкүмәт вәкилдәренә тапшыра. Кинйәнең ҡайҙалыр юҡ булыуы асыҡлана. Батша карателдәренең бер нисә йыл буйы эҙләүе лә һөҙөмтә бирмәй. Ҡыҙғаныҫҡа, халҡыбыҙҙың милли геройы Кинйә Арыҫланов яҙмышының һуңғы көндәре бөгөнгә тиклем билдәһеҙ, фажиғәле сер булып ҡала.

Кинйә Арыҫлановтың тормошо һәм күп яҡлы хеҙмәт юлы республикабыҙҙың күренекле яҙыусыһы Ғәли Ибраһимовтың ҙур күләмле өс томлы "Кинйә" исемле тарихи романында донъя күрҙе. Ғайса Хөсәйенов, Рәшит Шәкүрҙең дә был темаға ғилми-биографик яҙмалары ҙур әһәмиәткә эйә. Әмир Абдразаҡовтың күп сериялы "Кинйә" исемле кинофильмы ла халыҡта ҡыҙыҡһыныу уятты һәм хуплау тапты.

Шулай итеп, юғарыла әйткәндәрҙән сығып, күптән борсоған ошо теманы күтәрмәксемен. Беҙ тарихи Арыҫлан ауылы, уға нигеҙ һалған һәм уның исемен йөрөткән Арыҫлан батыр Аҡҡолов, милли геройыбыҙ Кинйә Арыҫланов ме-нән ғорурланабыҙмы? Бөгөнгө йәш быуынды милли рухта, илһөйәрлек сифаттарында тәрбиәләүҙә ошо шәхестәребеҙ образын, тормош һәм яу юлын нисек, ниндәй кимәлдә файҙаланабыҙ? Юҡ, тиергә була. Мәҫәлән, Арыҫлан ауылында ошо батырыбыҙға арнап, республика кимәлендә саралар үткәрергә булыр ине бит. Әммә шуныһы ғәжәп: Арыҫландың тарихи ауыл, арҙаҡлы шәхестәр төйәге икәне тураһында ләм-мим (Арыҫлан таралған исем, бындай исемле ауылдар берәү генә түгел). Ә бит тораҡ пункт йәй айҙарында Нөгөш, Йомағужа һыуһаҡлағыстарына меңәрләгән кеше үткән юл өҫтөндә. Мин был хаҡта Арыҫлан ауыл советына (Арыҫлан батыр исемен йөрөтә), район хакимиәтенә тәҡдимдәремде еткерҙем. Был уңайҙан район советы йәки хакимиәтенең махсус ҡарары кәрәк. Унда иң беренсе сиратта Арыҫлан ауылын төҙөкләндереү һәм башҡа социаль әһәмиәтле эштәр ҡаралыуы мөһим.

Күрше Көйөргәҙе районынан өлгө алырға кәрәклекте билдәләп үткем килә. Кинйә абыҙ исемен йөрөткән ауылда һәр биш йыл һайын Кинйә Арыҫлановтың юбилейына бағышлап, тирә-яҡ райондар, республикабыҙ власть органдары, йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашҡан мәҙәни саралар ойоштоҙола. Ауылда Кинйә Арыҫлановҡа бағышланған музей, уның бюсы рәүешендә ҡуйылған һәйкәл бар. Район үҙәге булған Ермолаевка ҡасабаһында хәрби Кинйә батырҙы кәүҙәләндергән һәйкәл ҡуйылған. Тик Кинйә Арыҫлановтың тыуып үҫкән, 45 йылдан ашыу ғүмер иткән төйәгендә ундай саралар үткәрелмәй.

Мәләүез ҡалаһында 9-сы башҡорт гимназияһына Кинйә Арыҫланов исемен биреү хуплау тапты. Ҡаланың Ҡояшлы биҫтәһендәге бер урам уның исемен йөрөтә. Байтаҡ йылдар элек йәмәғәтселек тәҡдимдәренән сығып, район хакимиәте башлығы ҡушыуы буйынса Кинйә Арыҫлановҡа һәйкәл проекты әҙерләнде һәм ҡуйыу урыны "Ағиҙел" ҡунаҡханаһы алдындағы майҙансыҡ билдәләнде. Проекттың авторы - республиканың күренекле скульпторы Өлфәт Ҡобағошов. Тик әлегә төрлө сәбәп менән был эш кисектерелә һәм бөгөнгә тиклем проект ҡағыҙҙа һәм макетта ғына ҡала килә.

Һуңғы йылдарҙа ҡаланы төҙөкләндереү буйынса байтаҡ күләмле эш башҡарыла. Әгәр ҙә маҡсат ҡуйылһа, һәйкәл мәсьәләһен дә хәл итеү сараһын табырға булыр ине. Беҙ Көйөргәҙе районынан ярлыраҡмы ни? Республикабыҙҙың 100 йыллығын билдәләгән осорҙа байтаҡ райондарҙа тарихи ваҡиғалар, арҙаҡлы шәхестәргә бағышлап стелалар, һәйкәлдәр ҡуйҙылар бит.

Арыҫлан ауылының оло юбилейын, Кинйә Арыҫлановҡа һәйкәл ҡуйыу мәсьәләләрен хәл итеүҙә республика йәмәғәтселегенең дә, урындағы халыҡтың да талабы терәк булырға тейеш. Бигерәк тә Арыҫлан ауылы биләмәһе халҡының был йәһәттән ныҡышмалы әүҙемлек күрһәтеүе мөһим. Шулай уҡ урындағы ҡоролтайҙың башҡарма комитеты башлап йөрөүселәрҙең береһе булыр, тип уйлайым.

**Юнир АҘНАҒОЛОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ТАУЫҠТЫ ЛА...

## белеп көтөү кәрәк



**Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылында йәшәүсе Гөлнара һәм Марс Хәйруллиндар бына 15 йылға яҡын йомортҡа һала торған тауыҡ аҫрау менән мәшғүл. Ғаилә табынынан тыш, ауылдаштарын да йыл әйләнәһе йомортҡа менән тәьмин итеп тора уңған ғаилә. Хужабикә был шөғөлгә үҙе лә һиҙмәҫтән тотона. Күршеләренең ихатаһындағы матур ғына тауыҡтарға һоҡланып, уларҙың йомортҡаларын һорап ала. Өфөнән килтерелгән "несушка"ларҙы баҫтырып сығара. Тора-бара бындай тауыҡтар Бөрйән баҙарында ла һатыла башлай һәм Гөлнара Әхәт ҡыҙы хужалығында тауыҡтарҙың бүтән төрлө тоҡомдарын да һынап ҡарай.**

- Башта "Кучинская юбилейная" тигән тоҡомло тауыҡтар алдым - уларҙың кәүҙәһе ҙур, әммә йомортҡалары бәләкәй ине, - тип һөйләй Гөлнара.- Көлһыу төҫтәге "Серебристая" тигәнен дә алып ҡараным, улар аҡ ҡына йомортҡа һалалар ине. "Доминант" тигән кросстарҙы ла аҫрап ҡарау ҡыҙыҡлы булды. Әлеге ваҡытта Баймаҡ ҡалаһынан "Байрамғолов" фермер хужалығында үрсетелгән "Хайсекс Браун" тип аталған ҡыҙғылт-һары төҫтәге тауыҡтарҙы аҫырайым. Улар беҙҙең климатҡа яраҡлашыуы менән отошло. Ауыл тауығы һәм тоҡомло тауыҡтарҙы аталандырыуҙан барлыҡҡа килгән кросстар йылытылмаған һарайҙа ла ҡыш сыға алыуы, көн һайын тиерлек йомортҡа һалыуы менән айырылып тора.

Ғәҙәттә, баҙарҙа 4 айлыҡ себештәрҙе, бер айҙан йомортҡа һала башлай, тип һаталар. Әммә минең тауыҡтарым 7-8 айлыҡ булғас ҡына йомортҡа һалыуға өлгөрөп етә. Беҙҙең тауыҡтар, йылына ҡарап, февраль-март айынан декабргә тиклем йомортҡа һалалар. Ашау төрлө һәм сифатлы, оя йылы булғанда хатта йыл әйләнәһенә һалырға ла мөмкиндәр.

Тәғәйен йомортҡа һалыу өсөн аҫраған тауыҡтарҙы, ғәҙәттә, 2-3 йылдан йәшәртәһең. 4 йылға тиклем дә аҫрарға мөмкин, әммә улай итеүҙән файҙа юҡ. Берҙән, йомортҡа һалыуы кәмей, икенсенән, һуйған саҡта ите ҡаты була.

"Несушка"лар себеш баҫып сығара тиһәләр ҙә, ниңәлер, минең тауыҡтарым себеш сығара һалмайҙар. Шуға ла мин хәйлә уйлап таптым. Тауыҡ баҫырға ятып, 10 көн үтеүгә бер аҙналыҡ себеш һатып алам да, төндә ҡанаты аҫтына тығам. Шуныһы ҡыҙыҡлы: тауыҡ артабан йомортҡаны баҫып ятмай, себештәргә әүрәй ҙә китә. Бындай тауыҡтар себештәрҙе бик яҡшы көтәләр. Һәйбәт бит: берҙән, тауыҡ оҙаҡ ятып ваҡыт әрәм итмәй, икенсенән, себештәр ҡараулы була, өсөнсөнән, өй мөхитендәге ризыҡҡа бәләкәйҙән өйрәнәләр. Ә ҙурайған тауыҡтарҙы һатып алған осраҡта өйҙәге ризыҡҡа ҡулайлаштырыуы ҡатмарлаша, фабрикала ашарға күнеккән махсус ризыҡ талап итәләр.

Һатып алғас, себештәргә тәүҙә заводта әҙерләнгән махсус ҡоро аҙыҡ ашатырға кәрәк. Шыйыҡ ризыҡтан уларҙың эсе китә. Унан 2-3 көнгә бер тапҡыр аҙлап бешкән йомортҡа бирәм. 3 аҙналыҡ булғас, ҡоролай эремсек һала башлайым. Ҙурайған тауыҡтарға инде сейләй ашҡабаҡ, бешкән картуф, эремсек, эремсек һыуына ҡатнаш аҙыҡ ҡушып ашатам. Әлбиттә, ҡаты ризыҡһыҙ ҙа булмай: иртәле-кисле мотлаҡ бойҙай һибәбеҙ. Ә төшкөһөн ҡатнаш ризыҡ әҙерләп бирәм. Ҡышҡыһын көнбағыштың май һыҡҡандағы ҡалдығын (жмых), ризыҡҡа ҡушып аҙлап аҡбур бирәм, был уларға витамин ҡытлығын булдырмау өсөн кәрәк. Яңы алған себештәргә шулай уҡ алһыу төҫ ингәнсе марганцовка һалынған һәм йодинол тамыҙып әҙерләнгән таҙа һыуҙы аралаштырып эсерергә кәрәк. Шулай уҡ ҙурайған тауыҡтар өсөн дә 2-3 аҙнаға бер тапҡыр бындай профилактика саралары үткәреп тороу зарур. Көл менән ҡырсынташ һәр ваҡыт алдарында ултыра. Ә ояларын эзбиз менән ағартып торабыҙ. Өй тауыҡтарынан айырмалы, һатып алынған себештәр өй шарттарына өйрәнеп киткәнсе ауырып китеүҙәре лә ихтимал, бындай осраҡта мотлаҡ антибиотик дарыуҙар бирергә кәрәк, шунһыҙ улар шәбәйә алмай.

**Динара ҠОТЛОБАЕВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Нимә беренсел: рухиәтме, матдилыҡмы

Һеҙ нимә менән идара итергә теләйһегеҙ - сәбәп менәнме, әллә эҙемтә менәнме? Был хаҡта уйланып, тиҙ арала эҙемтәләр өҫтөнән хакимлыҡ итеү сикле икәнлеген аңларһығыҙ. Мәҫәлән, әгәр ҡарҙы эҙемтә тип алһаҡ, уның өҫтөнән хакимлыҡ итеү ҡар бабайы әүәләү, ҡар бәрешеп уйнау йәки ҡар көрәү мөмкинлеген бирә. Әммә ҡар яуыуҙың сәбәптәре өҫтөнән хакимлыҡ уның яуырғамы, юҡмы икәнлеген хәл итер ине. Бөтөн Йыһанда эҙемтә - матди донъяға, сәбәптәр рухиәт донъяһына ҡарай.

Әйҙәгеҙ, боронғо бөйөк фекер эйәләренең әйткәндәренә күҙ һалайыҡ: "Рухиәттең матди донъянан өҫтөнөрәк икәнен белеүселәр бөйөк кешеләр булған" (Ральф Уолдо Эмерсон). "Бер хәҡиҡәт бәхәсһеҙ булып ҡала: кешелек тарихында булған бөтөн нәмә ниндәйҙер рухиәткә нигеҙләнә" (Альберт Швейцер). "Үҙ тәнеңде һаҡлап ҡалыу өсөн ныҡлы рух кәрәк" (Дуглас Мак-Артур).

Әлбиттә, был кешеләр күҙгә күренгән терәктең яҡшы, әммә күҙгә күренмәгәненең тағы ла яҡшыраҡ булыуы менән килешер ине.

Хәҙер сикһеҙ рухи ярҙамға юл ярыусы ниндәйҙер мистик формула асыр тип көтәһегеҙме? Юҡ, ә ни өсөн икәнен Көнсығыштың бөйөк фәйләсуфы, ҡасандыр теософ йәмғиәтен етәкләүсе Кришнамурти аңлатыр: "Бер ваҡыт мин 1911 йылда барлыҡҡа килеп, миндәрсә ағзаһы булған ойошманың башлығы булып киттем. 1929 йылда уны тараттым. Был хәҡиҡәткә юл түгел, дин булып ойошҡан имандан тыш бер генә ойошма ла кешене хәҡиҡәткә һәм ҡотолоуға алып килмәйәсәк, тинем. Бынан тыш, бындай рухиәткә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә юлбашсылар һәм гурулар юҡ, ниндәй ҙә булһа етәкселек кешене юлдан яҙҙыра. Һеҙ үҙегеҙ үҙегеҙҙең уҡытыусығыҙ ҙа, уҡыусығыҙ ҙа булырға тейешһегеҙ".

Шулай ҙа мин һеҙгә ҡайһы яҡҡа барырға йүнәлеш бирәм: үҙегеҙгә, эске донъяғыҙға. Матди эҙемтәләрҙең рухи сәбәптәре ҡайҙа йәшеренгән һуң? Мине Һиндостанға медитацияға өйрәтергә саҡырҙылар. Һиндостан - медитацияның тыуған урыны. Әммә мине пассив түгел, Һиндостанда меңәр йылдар шөғөлләнгән динамикалы медитацияны уҡытырға саҡырҙылар. Өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, һеҙ визуалләштереү һәләтегеҙҙе ҡуллана һәм киләсәкте "күреү" өсөн хыялығыҙҙы эшкә егә башлайһығыҙ. Ижади көсөгөҙҙө лә киләсәкте төҙөүгә йүнәлтәһегеҙ. Был динамикалы медитация тип атала ла инде. Һиндостанда медитация, ғәҙәттә, бер ни тиклем тәрән, йәғни медитациялаған кеше урынында ҡатып ҡала, уның мейеһе бер ниндәй ҙә әүҙемлек күрһәтмәй. Бындай медитация пассив медитация тип атала. Һиндостанда биш мең йылдан ашыу йога менән шөғөлләнәләр. Йогтар бер ауырлыҡһыҙ мейе тулҡындарының тэта-кимәленә сыға: секундына биш-ете тирбәлеш. Шулай итеп, улар матдәләр алмашыныуын аҡрынайта. Уларҙы ерләргә лә мөмкин, сөнки улар тотош ай буйы ҡәберҙә кислородһыҙ ята ала. Пассив медитацияның киң таралыуына ҡарамаҫтан, Һиндостан хәйерсе һәм яфаланыусы ил булып ҡала. Бөтөн сәбәп шунда: пассив медитация бындай хәл-тороштан сығырға ярҙам итә алмай. Адъярҙағы Блаватская исемендәге Бөтөн донъя теософия йәмғиәте үҙәгендә мин медитацияның бөтөнләй икенсе формаһын уҡыттым. Дөрөҫ башҡарғанда был медитацияның әллә күпме өҫтәмә өҫтөнлөктәре булыуын ишетеп, уҡыусылар ағылды ла ағылды.

Бер ваҡыт миңә шундай тарих һөйләнеләр. Илаһ Ерҙәге берәй ышаныслы урында илаһилыҡты ҡалдырырға була. Ул уны бейек тау башына ҡалдырһа ла, диңгеҙ төбөнә йәшерһә лә табырҙарына ышана. Шуға ла уны кеше бер ваҡытта ла күҙ һалмаған йәки иң һуңынан ғына ҡараған урынға - уның күңеленә йәшерә. Дөрөҫ аҙымдар ҡулланып, кешеләрҙең барыһы ла үҙен өҙлөкһөҙ камиллаштырып, күҙгә күренмәһә лә, ышаныслы терәк менән тәьмин итә ала. Сөнки ул терәк уның күңел төбөндә.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**19 СЕНТЯБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**13.45 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**17.30 Автограф. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Фабрика грез". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**20 СЕНТЯБРЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома[12+]**
**11.45 Дознание. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Криминальный спектр"[16+]**
**17.45 "Дорога к храму". [0+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Новые приключения Аладдина". [12+]**
**2.45 Спектакль "Оль-ля-ля!". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**

**21 СЕНТЯБРЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.45 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Д/ф "Археостан". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.50 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**16.30 "Гора новостей". [6+]**
**17.45 Тайм-аут. [12+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**0.00 Х/ф "Опасные секреты". [12+]**
**3.15 Спектакль "Ой, кто там лежит?". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**22 СЕНТЯБРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Это моя профессия". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "МузКәрәҙ". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.45 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мизерере". [16+]**
**3.00 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**4.45 Автограф. [12+]**

**23 СЕНТЯБРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Васильки". [16+]
4.11 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Д/ф "Археостан". [12+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/с "Тайны космоса". [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 100 лет служения искусству. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Избранная судьба". [12+]**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.30 История одного села. [12+]**
**23.45 Х/ф "Чайка". [12+]**
**2.00 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**4.00 "Чайка". [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

**24 СЕНТЯБРЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Свидетельство о рождении". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "За всех в ответе". [12+]
0.50 Х/ф "Искушение наследством". [12+]
4.10 Х/ф "Чертово колесо". [16+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.00 "Это моя профессия". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.30 Ныҡ бул. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15, 22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Минск). КХЛ.**
**19.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Х/ф "Безумная свадьба". [12+]**
**2.15 Спектакль "Долгое-долгое детство". [12+]**
**4.30 Әлләсе… [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**25 СЕНТЯБРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.30, 3.00 Х/ф "Любовь до востребования". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Свидетельство о рождении". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Отец". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Народный певец. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Дорога к храму". [0+]**
**15.15 Историческая среда. [12+]**
**15.45 Концерт группы "Каравансарай". [12+]**
**18.15 Әлләсе… [12+]**
**19.00 Д/ф "Меня зовут Салават". [12+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 3.00 Х/ф "Самая безумная свадьба". [16+]**
**0.45 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 сентябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтов әҫәре буйынса). 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:
**24 сентябрь "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 14.00 0+
**25 сентябрь "Два кота"** (О.Штырляева). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 сентябрь** Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Р. Ғәйзуллиндың юбилей кисәһе. 6+
**27 сентябрь "Опера без кулис"** концерт. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 сентябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Я.Пулинович, Г. Яхина романы буйынса) спектакле менән М. Ғафури исемендәге БАДТ гастролдә. 16+
**21 сентябрь "Дорожная сказка"** (Л. Нигматуллина), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**19 сентябрь "Һағыштарым тулы ғазаптарым"** (Я. Пулинович), мелодрама. 12+
**20 сентябрь Премьера! "Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 16+
**21 сентябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**22 сентябрь "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.), хикәйәт. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**22 сентябрь "Хеҙмәтенә күрә хөрмәте!"** 32-се ижад миҙгелен асыу тантанаһы. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Сентябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (23) дүшәмбе | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 17:19 | 19:21 | 20:51 |
| 20 (24) шишәмбе | 5:29 | 6:59 | 13:30 | 17:17 | 19:18 | 20:48 |
| 21 (25) шаршамбы | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 17:15 | 19:16 | 20:46 |
| 22 (26) кесе йома | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 17:13 | 19:13 | 20:43 |
| 23 (27) йома | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 17:10 | 19:11 | 20:41 |
| 24 (28) шәмбе | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 17:08 | 19:08 | 20:38 |
| 25 (29) йәкшәмбе | 5:38 | 7:08 | 13:30 | 17:06 | 19:05 | 20:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *1879 йылда белемен артабан камиллаштырыу ниәте менән Ҡаҙанға юллана. Бында Х. Үтәки танылған Шиһабетдин Мәржәни хәҙрәттең мәҙрәсәһендә төрлө фәндәрҙән дәрес ала башлай.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 26 СЕНТЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ДИҢГЕҘ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**36-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Арҡатау. Балта. Бәрәкәт. Тула. Аласыҡ. Бармаҡ. Ысул. Ми. Ҡапҡаҡ. Көсөк. Ләңге. Бешкәк. Романс. Йоҙаҡ. Түрә. Асыу. Ашуғ. Ауыҙ. Ажар. Ағыу.

**Вертикаль буйынса:** Бөркөтлө. Тубырсыҡ. Кәрәҙ. Батман. Алабай. Ләм. Ҡабырсаҡ. Мә. Тағара. Кирәм. Соус. Умартасы. Балауыҙ. Паштет. Солоҡ. Ҡороҡ. Кейә.

*АЛДАЙҘАР!*

# ОЯТҺЫҘЛЫҠТЫҢ СИГЕ...



**Муттар енел аҡса эшләү өсөн төрлө схемалар уйлап таба, хатта улар кешеләрҙең иң нескә тойғоларында уйнарға ла тартынмай. "Туғанығыҙ (улығыҙ-ҡыҙығыҙ) юл-транспорт ваҡиғаһына эләкте", тип шылтыратһалар, әлбиттә, һәр кем ҡалтырап төшә, ғәзиздәре исән-имен булһын өсөн барыһына ла риза - бары тик ярҙам ғына күрһәтһендәр!**

Октябрьский ҡалаһында хаҡлы ялдағы ике ҡатын да ошо схема ҡорбаны булған. Беренсе осраҡта 75 йәшлек ҡатындың өй телефонына шылтыратып, үҙен хоҡуҡ һаҡлау органы хеҙмәткәре тип таныҡҡан берәү ханымдың туғанының юл һәләкәтенә эләгеп, дауаханала ятыуын, ярҙам итеү өсөн 800 мең һум аҡса тапшырырға кәрәклеген белдерә. Ҡатын ваҡиға шарттарын асыҡлап тормай, ни бары 120 мең һумы ғына булыуын әйткәс, шылтыратыусы, шундай-шундай кеше килеп алыр, ти. Бер ни тиклем ваҡыттан медицина битлеге кейгән кеше килеп, аҡса алып китә, һөҙөмтәлә ҡатын унын йөҙөн дә йүнләп хәтерләмәй.

Икенсе осраҡ та шундай уҡ схема буйынса тормошҡа ашырыла. Йәнәһе лә, аварияға осраған ҡыҙына ярҙам итеү өсөн 800 мең кәрәк. Ҡатын ундай сумма булмауын белдергәс, шылтыратыусы күпме бар, шунса һорай. Аҡса артынан килеүсе шулай уҡ медицина битлеге кейгән була. Ҡатын уға 100 мең һум тотторо п ебәрә.

Бындай хәлдәр тормошобоҙҙа йыш ҡабатланып тора, шуға, шикле шылтыратыуҙар була ҡалһа, иң тәүҙә яҡындарығыҙ менән бәйләнешкә сығып, хәл-торошто асыҡлағыҙ.

**Дарья СУББОТИНА.**

*БЫЛ АЙҘА...*



# ХӘБИБНАЗАР ҮТӘКИ

**Сентябрҙә дин эшмәкәре, мәғрифәтсе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең уҡытыусы-остазы Хәбибназар Һатлыҡов-Үтәкиҙең тыуыуына 160 йыл тулды. Ете томлыҡ "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның икенсе томында Хәбибназар Үтәки хәҙрәттең ижадына ла урын бирелгән. Бынан тыш, унының тураһында башҡа китап һәм мәҡәләләрҙә мәғлүмәттәр осрай.**

Хәбибназар хәҙрәт Өфө губернаһы Стәрлетамак өйәҙенең (бөгөнгө көндә Башҡортостандың Ғафури районының) Үтәк ауылында 1861 йылдың 29 июлендә донъяға килә. Әсәһе Мөбәрәкъямал Шәрәфетдин ҡыҙы исемле була. Мөхәммәдҡафи бин Ҡотлозаман бин Рысҡул бин Һатлыҡ бин Дәүләт исемле атаһы иһә ауыл муллаһы вазифаһын үтәй.

Тәүге һабаҡтарын атаһының мәҙрәсәһендә алған Хәбибназар Яңғыҙҡайын ауылында Ғиниәтулла хәлфәлә төрки телен өйрәнә. 1873 йылда ул Стәрлетамаҡ ҡалаһында Камалетдин хәҙрәт мәҙрәсәһендә ғәрәп теле грамматикаһы буйынса дәрестәр ала. 1879 йылда белемен артабан камиллаштырыу ниәте менән Ҡаҙанға юллана. Бында Х. Үтәки танылған Шиһабетдин Мәржәни хәҙрәттең мәҙрәсәһендә төрлө фәндәрҙән дәрес ала башлай. Ш. Мәржәни унының тырышлығына, зирәклегенә, һәләтлегенә шунда уҡ иғтибар итә. Уҡыуын тамамлағас, Х. Үтәки үҙе уҡыған ошо мәҙрәсәлә остазы Шиһабетдин Мәржәни вафатына ҡәҙәр хәлфә булып эшләй.

1889 йылда тыуған ауылы Үтәккә әйләнеп ҡайта. Ырымбур мосолмандар диниә назаратында һынау тотҡандан һуң икенсе мәхәлләлә уға имам булырға рөхсәт ителеп, Ырымбур мөфтөйө М. Солтанов тарафынан Стәрлетамаҡ өйәҙе приставына 1891 йылдың 26 мартында түбәндәге хат ебәрелә: "Покорнейше прошу Ваше Высокоблагородие объявить башкиру деревни Утяковой Хабибназару Мухаметкафиеву, что впредь до утверждения его имамом к 2 Утяковской соборной мечети, разрешаю ему отправлять, как соборное, так и пятивременное богомоление".

Ғүмеренең аҙағына тиклем Хәбибназар Үтәки дини вазифа башҡара. 1921 йылдың 29 июнендә вафат була.

Х. Үтәки "Хикмәт әл-ғәйн" ("Нәғим Әл-Ҡотайбаның физика һәм метафизика фәндәренә аңлатмалары"), "Мостафад әл- әхбәр"гә аңлатмалар", "Мифтах әт-тәуарих" ("Тарих асҡыстары") әҫәрҙәре авторы, "Нәуадир" әҫәрен ғәрәпсәнән төрки теленә тәржемә итеүсе. Бынан тыш, ул 1915 йылда үҙенең остазы Ш. Мәржәниҙең тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышлап сығарылған "Мәржәни" исемле йыйынтыҡта уҡытыусыһы хаҡында мәҡәлә нәшер итә. Шул заман матбуғатында ул яҙған башҡа мәҡәләләрҙе лә осратырға мөмкин.

Х. Үтәки мәҙрәсәһенән байтаҡ күренекле кешеләр сыҡҡан. Шуларҙың береһе - унының һеңлеһенең улы Әхмәтзәки Вәлиди.

**Әхәт СӘЛИХОВ, тарих фәндәре кандидаты.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЯҘЫУСЫНЫ ДАНЛАУ...

## китапты данлау ул

**"Торатау" конгресс-холлында Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипованың милли әҙәбиәтте һәм мәҙәниәтте үҫтереүгә индергән өлөшөнә арналған Бөтөн Рәсәй ғилми-ғәмәли конференция үтте.**



Таңсулпан Ғарипова - күренекле прозаик, драматург, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре. "Таңсулпан Ғарипова - ысын халыҡ яҙыусыһы, уҡыусыларҙың һөйөүе һәм ихтирамы быны дәлилләй, - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Азат Бадранов. - Белеүегеҙсә, "Бөйрәкәй" романы хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә иң уҡымлы әҫәр булып тора. Әлбиттә, яҙыусының иғтибарға лайыҡ әҫәрҙәре байтаҡ. Уның китаптары һүҙ осталығы өлгөһө генә түгел, уларҙы табип, социолог менән сағыштырырға мөмкин, сөнки улар кешенең күңелен сағылдыра. Тап шуға ла йәмғиәттә киң сағылыш таба. Таңсулпан Хизбулла ҡыҙына хеҙмәте һәм ижады өсөн ихлас рәхмәтлебеҙ".

Азат Шамил улы яҙыусыға ныҡлы һаулыҡ һәм яңы ижади уңыштар теләп, күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте һәм башҡорт әҙәбиәте үҫешенә тос өлөш индергәне өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың Рәхмәт хатын тапшырҙы.

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипованың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған конференцияға республиканың юғары уҡыу йорттары вәкилдәре, музейҙары, китапханалары, театрҙары етәкселәре һәм белгестәре, журналистар, яҙыусылар, шулай уҡ Мәскәү, Силәбе, Чечен Республикаһы, Тыва, Удмуртия, Алтай, Чехия һәм АҠШ-тан вәкилдәр килгәйне.

- Был конференция минең ижадымды ғына түгел, ә башҡорт әҙәбиәтен, Башҡортостан халҡын, китапты данлай тип иҫәпләйем. Шуға күрә яҙыусыларға халыҡтың рухын күтәргән һәм кешеләрҙе бөйөк ҡаҙаныштарға илһамландырған әҫәрҙәр ижад итергә кәрәк. Әгәр миңә 25 йәш булһа, яңы әҫәрҙәр өҫтөндә эшләй башлар инем. Ләкин миңә 75 йәш, алда бөтә томдарҙы сығарыу бурысы тора, - тине Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипова.

Конференция аҙағында резолюция ҡабул ителде. Ойоштороусылар Таңсулпан Хизбулла ҡыҙына "Өфөнөң почетлы гражданы" исемен биреүҙе юллай. Уның "Бөйрәкәй" китабы буйынса спектаклдәрҙе республика театрҙары репертуарына индереү, киносериал төшөрөү, авторҙың һайланма әҫәрҙәрен рус телендә баҫтырып сығарыу һәм яҙыусының тыуған яғында - Баймаҡ районында Таңсулпан Ғарипованың кабинет-музейын асыу күҙаллана. Башҡортостандың Милли әҙәбиәт музейына айырым бина биреү мөһим пункттарҙың береһе булды, әлеге ваҡытта Әҙәбиәт музейы Достоевский урамындағы 160-сы йорттоң беренсе ҡатында урынлашҡан. Сараны ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Милли әҙәбиәт музейы, Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы, Яҙыусылар союзы, "Әҙәбиәт. Музей. Мәҙәниәт" ойошмаһы.

МӘҘӘНИӘТ

# ЛАЙЫҠЛЫЛАР БӘЙГЕҺЕ



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары буйынса комиссия ултырышында беренсе этапты үткән конкурсанттар билдәләнде.**

- Премияға дәғүә иткән әҫәрҙәр һәм эштәр йәмғиәткә билдәле, ижтимағи әһәмиәткә эйә булырға тейеш. Шуға комиссия ҡарары менән Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығына телевидениела фекер алышыуҙар ойошторорға, дәғүәселәргә уҙ эштәре менән таныштырыу өсөн ваҡыт бирергә тигән тәҡдим индерҙек, - тип хәбәр итте республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадранов.

Шулай итеп, 2022 йылда Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына дәғүә итәләр:

- "Тимер быуат", "Рух көмбәҙе: поэма, шиғырҙар, тәржемәләр", "Һайланма әҫәрҙәр: шиғырҙар, поэмалар" тигән йыйынтыҡтары өсөн шағирә Тамара Юлдашева;
- "Урал һәм Волга буйы халыҡтары тарихына яңы ҡараш", "Бөйөк Башҡортостан. Халыҡтар: этник тамырҙар, формалашыу һәм үҫеш", "Боронғо башҡорттар. Тарихи мәғлүмәттәр", "Кол Ғәли һәм башҡорт халҡы мәҙәниәте тураһында", "Башҡорт хан. Урта быуат хандары" китаптары авторы Йәдкәр Бәширов;
- "Йөрәк һүҙе" проекты авторы Наилә Сәфәрғолова;
- "Генерал Шайморатов" тарихи романы авторы Флүр Ғәлимов;
- Бөрйән районында "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей комплексы экспозицияһы проекты авторҙары Рөстәм Әлибаев, Илфат Аҡтуғанов, Гөлфиә Тажетдинова;
- "Минең исемем - Салауат", "Һайлап алған яҙмыш" документаль фильмдар серияһы авторҙары Гәүһәр Батталова, Урал Ғатауллин, Әлфиә Арыҫланова;
- "Ат уйнатып алдан бара " спектакле өсөн Зөһрә Бураҡаева, Артур Кәбиров, Рәис Низаметдинов;
- "Заһир Исмәғилев мираҫының алтын биттәре" проекты өсөн Артур Нәзиуллин, Дмитрий Крюков.

# РОЛДӘРҘЕ КЕМДӘР УҠЫЙ?



**Башҡортостанда "Төньяҡ амурҙары" беренсе тулы метражлы башҡорт йәнһүрәте өҫтөндә эш тамамланып килә. Уның өҫтөндә билдәле рәссам-карикатурасы Камил Буҙыҡаев һәм "Муха" студияһы эшләй.**

Ролдәрҙең береһен Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҡый, тип яҙып сыкты яңыраҡ бер нисә киң мәғлүмәт сараһы. "Башинформ" дөрөҫ мәғлүмәт алыу өсөн "Муха" студияһы продюсеры Артур Абдрахмановҡа мөрәжәғәт итте.

- Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, республика етәксеһе беҙҙең фильмда ролдәрҙе уҡыуҙа ҡатнашманы. Ул беҙҙең проекттың инициаторы булып тора, кемдер дөрөҫ аңламағандыр, моғайын, - тине продюсер. - Ролдәрҙе беҙҙең сәхнә йондоҙҙары Элвин Грей (Радик Юлъяҡшин), Нәзифә Ҡадирова, Иҙрис Ғәзиев, Фидан Ғафаров, Азамат Ғафаров, LUMEN төркөмө артистары, ВИА Чаппанан Илья Тавлияров, Руслан Ронич, Илнур Лоҡманов уҡып ишеттерҙе.

Йәнһүрәт башҡорттарҙың, "Төньяҡ амурҙары"ның, XVIII быуат аҙағында рус-швед һуғышында ҡатнашыуына, шулай уҡ 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған. "Төньяҡ амурҙары"ның премьераһы декабрҙә күрһәтәлә.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАТЫНЫҢ ЯҠШЫ БУЛҺА...

## ожмах кәрәкмәй

Аҡылыңды камиллаштырыу өсөн күп ятларға түгел, ә күп уйларға кәрәк.

**(Рене Декарт).**

Буйҙаҡ тормош - тамуҡ, ишле тормош - чума.

**(Роберт Бартон).**

Бай булырға теләһәң, аҡса табырға ғына түгел, аҡсаны тотонорға ла өйрән.

**(Бенджамин Франклин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер төркөм халыҡ урлашыу менән шөғөлләнгән бурҙы тотоп, уны хөкөм итеү өсөн Уҡытыусыға алып килә: "Беҙ өйҙәребеҙгә төшкән, ҡошҡортобоҙҙо урлаған бурҙы тоттоҡ, - ти улар. - Уның менән ни ҡылырға икәнен әйтсе, хөрмәтле Уҡытыусы: баҙға төшөрөп ябып ҡуйырғамы, әллә хөкөм итер өсөн судья ҡулына тапшырырғамы?"**

**- Был кеше ысынлап та яуыз булһа, уның менән ни эшләһәгеҙ ҙә эшләрһегеҙ. Әгәр ҙә ул яуыз булмаһа, мин теләгәнсә булыр, - ти Уҡытыусы.**

**Халыҡ уның әйткәне менән килешә, сөнки улар был бурҙың яуыз икәненә ныҡлап инанған була. Уҡытыусы бур эргәһенә килә һәм: "Һин ысынлап та бурмы?" - тип һорай. "Эйе", - ти бур. "Һин был кешеләрҙең өйҙәренә төшөп, әйберҙәрен, ҡош-ҡортон урланыңмы?" - тип һорай Уҡытыусы. "Эйе" - тип яуаплай бур. Халыҡ: "Ниңә уға һүҙ әрәм итәһегеҙ. Үҙенең бур икәнен үҙе уҡ әйтеп тора бит..." тип шаулаша башлай. Уҡытыусы һорау алыуҙы дауам итә һәм: "Ә һин ни өсөн урлаштың?" - ти. "Минең балаларым ашарға теләй. Ҡатыныһдың йүнле кейеме лә юҡ, һыуыкта ла яланаяҡ йөрөй. Уларға ҡарап, йөрәгем өҙөлә. Мин балаларымды ас итмәҫ өсөн урлашыуға барҙым..." - ти бур. Шул саҡ Уҡытыусы ҡарашын халыҡҡа йүнәлтә һәм былай ти: "Әгәр ҙә был кешенең урлашыу сәбәбе үсал ниәттән тип иҫәпләйһегеҙ икән, уны баҙға төшөрөп ябып ҡуя алаһығыҙ. Әгәр ҙә был кешенең урлашыу сәбәбе изге ниәттән икән, тимәк, уны яуыз тип атап булмай. Ул саҡта һеҙ мин сығарған хөкөм менән килешергә тейешһегеҙ..."**

**Халыҡ тынып ҡала, бөрәү ҙә Уҡытыусының әйткәненә ҡаршы килергә батырсылыҡ итмәй. Уҡытыусы дауам итә: "Был кешегә кейемдәр һәм аҙыҡ килтерегеҙ. Уға үҙегеҙҙең ышанысығыҙҙы белдерегеҙ һәм ярҙам ҡулы һуҙығыҙ. Шул саҡта һеҙҙең хөкөмөгөҙ гүзәл булыр. Үс алыуҙы икейөҙләләргә, Алла хәҡиҡәтен белмәгәндәргә ҡалдырайыҡ. Һеҙ артабан да шулай итегеҙ: кемдер юлдан яҙа икән, уға бәләгә ҡалған үҙ ағайһығыҙға ҡараған кеүек ҡарағыҙ. Шул саҡта йөрәгегеҙ гүзәл хөкөмдө үҙе сығарыр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танылкылы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
16 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3540
Заказ - 1171